*Март аҙағына тиклем "Киске Өфө"гә 2010 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән икенсе ярты йыллыкҡа яҙылып була. Апрелдән хаҡтар бер аҙға артасаҡ. Индекс - 50665, хаҡы - 306 һум 84 тин. Беренсе ярты йыллыкта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 апрелгә тиклем яҙылһа, "Киске Өфө"нө майҙан алдыра башлаясаҡ. Ҡыҫҡаһы... Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27 МАРТ - 2 АПРЕЛЬ (БУРАНАЙ - АЛАҒАРАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №13 (379)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Дуҫыңды еңелсә ярат,** йәки Һәр нәмәлә сама бел



6

**Ибраһим Исхаҡов**



7

**Һүҙем бала йөрәгенә етһен өсөн...**



8-9 йөҙөм ихлас, сырайым нурлы булырға тейеш

**Күңел бушлығын...** ни менән тултыраһың, йәш кеше?



15

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй сәйәсәтендә бик йыш күҙәтелгән "ике стандарт" принцибын нисек аңлатырға була?

***Мәзһәр ИҪӘНБАЕВ:***

"Ике стандарт"принцибы Рәсәй Федерацияһы етәкселегенең илдең социаль-иҡтисади, хәрби, регионлар менән мөнәсәбәт мәсьәләләре буйынса аныҡ ҡына сәйәсәте булмауы арҡаһында ла килеп сығалыр. Беҙҙә хәҙер бер төрлө уйлайҙар, икенсе төрлө һөйләйҙәр, өсөнсө төрлө эшләйҙәр. Тимәк, бында "өс стандарт" хаҡында ла һүҙ йөрөтөргә була. Тап шуның арҡаһында төрлө кимәлдәге ил етәкселәре теге йәки был мәсьәләгә ҡарата төрлөсә баһа, комментарий бирә, ҡайһы саҡта үҙ-үҙенә ҡаршы ла килә. Дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәй Федерацияһының Төп Законы - Конституцияһында барыһы ла аҡҡа ҡара менән яҙылған, ниңә "шаршау артына" ҡасырға? Беҙ, башҡорттар, башҡалар менән асыҡтан-асыҡ мөнәсәбәт ҡороп һәм эш итеп өйрәнгәнбеҙ.

***Әхтәр БОҪҠОНОВ:***

Ике төрлө сәйәсәт бар: халыҡ алдындағы һәм "шаршау артындағы" сәйәсәт. Бөгөн Рәсәйҙә халыҡ, публика алдындағы сәйәсәт юҡ кимәленә сыҡты. Мәҫәлән, айырым кеше туранан-тура һайланып, депутат була алмай, сөнки кандидаттарҙы фирҡәләр генә тәҡдим итә ала. Айырым кеше губернатор, республика етәксеһе булып китә алмай, был вазифаға президент тәҡдим иткән кешене урындағы парламент раҫларға мәжбүр. Беҙҙең республика Президенты Мортаза Рәхимов иһә, республика халҡының ышанысын яулау аша власҡа килде. Хәҙер иһә кемдәр интригалар оҫтаһы, шулар үҙенә юл яра. Беҙ ундай "шаршау артындағы" сәйәсәткә әҙер булмай сыҡтыҡ. Шуның өсөн дә беҙ хәҙер йәш сәйәсмәндәрҙе әҙерләгән саҡта уларҙы ошондай сәйәсәт алымдарына ла өйрәтергә тейешбеҙ. Революцияға тиклем Рәсәй Думаһында башҡорт мәнфәғәтен яҡлаусы депутаттар булған. Улар абсолют монархияны бөтөрөп, конституциялы монархия төҙөү яғында торған. Тимәк, улар өлгөрөп еткән сәйәсмән булған. Ә бөгөн беҙ һайлап ҡуйған депутаттарҙың тауышы ил парламентында ишетелмәй ҙә тиерлек.

**Әмир ҒҮМӘРОВ әҙерләне.**

## АФАРИН!

**Бөрйән районының бер ауылындағы өйҙә күтәрмәнән алып түшәлгән аҫалы балаҫтарға иғтибар итеп: "Бына был, исмаһам, ысын башҡорт йорто", - тип уйлап ҡуйғайным. Бөхтә итеп йыйыштырылып, ҡот бөркөп торған яҡты өйө кеүек, хужабикәнең күңел донъяһы ла бөтөн, нурлы ине. Бәләкәй генә ауыл өйөндәге аҫалы балаҫтар ҡаланың күркәм биналарында түшәлгән ҡиммәтле келәмдәргә ҡарағанда ла зауыҡлыраҡ, йылыраҡ, затлыраҡ тойолдо. Әйтерһең дә, ошо балаҫтар ысын башҡорт мөхитен тергеҙеп, милли асылыма яҡынайтҡандай итте.**

# ЗАТЛЫ ЛА, ЗАУЫҠЛЫ ЛА...

### был аҫалы башҡорт балаҫы

(Дауамы 10-11-се биттәрҙә).



## БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ



### БАШҠОРТ

Башҡорттармы?
Ике сатлы милләт:
Ҡасан ярылғандыр урталайға.
Бер яртыһы йыя.
Ә берәүһе
Рәхәт сигә, ерен һуҡалай ҙа.

Башы бик үк һыймай Өфөләргә.
Ҡото - ауылдарҙа.
Ә аҡсаһы
Һынтылһа ла буйы етмәҫ ерҙә
Тулып ята.
Сит-ят кеҫәләрҙә.

Башҡорт үҙе һере.
Сыҙам милләт!
Иңендә Ер гәме,
Намыҫ,
Бурыс.
Янсыҡ ҡына ҡымтып йәнәш килгән
Юлдашҡа ла һыр бирмәүең кәрәк:
Билдә балтаң булһын,
Ҡында -ҡылыс.

Ә шулай ҙа юлда.
Юлда.
Юлда...
Арба сәкүшкәһе - урынында.
Ракеталар,
Банктар,
Нефть,
Алтын...
Зыу килешә илдәр Ер шарында.
...Утын ташый башҡорт
Арҡайымға.

Усаҡ һүнһә, сөнки,
Тик ул ғына
Яуап бирә
Хоҙай ҡаршыһында.

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

*✓ "Туған тел" заставкаһы менән ҡурай моңо яңғырап китеүе була, ут күршеләребеҙҙән килгән ижади төркөм татарса менән урыҫсаны бергә ҡушып, арзан зауыҡлы, асылда, иҫереклеккә бәйле юморҙар һөйләргә тотона.*



*ИШАРА*

**Ошо көндәрҙә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын ғәмәлгә ашырыу буйынса БР Хөкүмәте ҡарамағындағы комиссияның сираттағы ултырышы уҙғарылды. Был юлы Асҡын, Бишбүләк, Борай, Йәрмәкәй, Кушнаренко муниципаль райондары, Межгорье ҡалаһының ябыҡ административ-территориаль округы хакимиәттәре тарафынан ошо Закондың нисек үтәлеүе көн тәртибенә ҡуйылғайны. Ултырышты БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус ИЛЕШЕВ алып барҙы.**




# ЗАКОНДАН ТӘРТӘ ЯҺАМАЙЫҠ,

## йәки Закон үтәлешендә кәртәләр булмаһын

Мәғариф министры Зиннәт Аллаяров ултырышта ҡатнашыусыларҙы үрҙә күрһәтелгән төбәктәрҙә БР Хөкүмәте комиссияһы уҙғарған тикшереү һөҙөмтәләре менән таныштырҙы. Хакимиәт башлыҡтары комиссия тарафынан табылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм артабан тел менән бәйле проблемаларҙы ваҡытында хәл итеү саралары хаҡында һүҙ тотто. Хөкүмәт комиссияһы рәйесе урынбаҫары Илдус Илешев тикшерелгән төбәктәрҙә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын ғәмәлгә ашырыуға урындағы хакимиәттәрҙең тейешле иғтибар бирмәүен, аныҡ һәм ентекле контроль ойошторолмауын, төрлө атамаларҙағы хата һәм етешһеҙлектәрҙең ваҡытында төҙәтелмәүен түҙеп торғоһоҙ, тип нарыҡланы. Тап ошо вайымһыҙлыҡтары өсөн хакимиәт етәкселәре етди иҫкәртеү алды.

Ысынлап та, һүҙ барған республика законы бынан ун йылдан ашыуыраҡ элек ҡабул ителһә лә, төбәктәрҙә бер үк хаталар ҡабатлана тора. Әйтәйек, Хөкүмәт комиссияһы бынан 5 йыл элек урындағы етәкселәргә ниндәй дәғүәләр белдерһә, әле лә шулай: законға ярашлы күпме ҡарарҙар ҡабул ителгән, күпме саралар пландары төҙөлгән, яуаплылар тәғәйенләнгән, әммә, Крыловса әйткәндә, "йөк һаман да ҡуҙғалмай". Ни өсөн шулай килеп сыға һуң?

Ошо төбәктәр өсөн уртаҡ булған етешһеҙлектәрҙе барлап, асыҡлыҡ индереү зарур. Иң элгәре уҡыусыларҙы туған телдәрендә уҡытыу кимәленең бик түбән булыуына иғтибар итмәйенсә булмай. Әгәр мәктәп статусы буйынса милли мәғариф учреждениеһы, тип атала икән, был уҡыу йортонда күпселек предметтарҙы уҡытыу уҡыусыларҙың туған телендә башҡарылырға тейеш. Ҡыҙғаныска ҡаршы, милли мәктәп исемен йөрөтөп тә, уставында туған телдә уҡытыу тураһында бер һүҙ ҙә булмаған мәктәптәр бар. Урындарҙағы етәкселәр, мәҫәлән, башҡорт теленең дәүләт теле йәиһә туған тел булараҡ уҡытылыуына һылтанып, предметтарҙы туған телдә өйрәнеүҙе талап итмәй. Ғөмүмән, рус булмаған уҡыусыларҙы туған телдәрендә уҡытыу мәсьәләһе бөгөн етәкселәр иғтибары үҙәгендә булырға тейеш. Әгәр уҡыусыларҙың туған телдәрен ҡулланыу даирәһе мәктәп тупһаһынан уҡ тарая бара икән, улар тора-бара бер теллегә әйләнеп, тик тел аша ғына бар тулылығында үҙләштерелә торған милли мәҙәниәт һәм рухиәт йоғонтоһонан мәхрүм ҡаласаҡ. Ултырышта барған һөйләшеүҙә ошо проблема һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Тикшерелгән төбәктәрҙә хәлдәрҙе ал да гөл, тип әйтерлек түгел. Быға рус булмаған уҡыусыларҙың туған телендә уҡытылыу проценты дәлил: Асҡын районында - 20,5 процент, Бишбүләктә - 9,3, Борайҙа - 1,5, Йәрмәкәйҙә - 15,7, Кушнаренкола - 34,8, Межгорье ҡалаһында - 8,5 процент.

Хөкүмәт комиссияһын борсоған тағы ла бер мәсьәлә - республикабыҙҙа дәүләт телдәрен һәм туған телдәрҙе уҡытыуҙың тейешле һөҙөмтәгә эйә булмауы. Ошо йәһәттән байтаҡ эштәр башҡарылыуға ҡарамаҫтан, уҡыусыларҙың туған тел буйынса белем сифатын бар төбәктәрҙә лә ҡәнәғәтләнерлек кимәлдә, тип әйтеп булмай. Уҡыусының белем сифатын билдәләүсе факторҙар күп, шулай ҙа күп нәмә уҡытыусының үҙенән тора. Үҙ предметын бик юғары кимәлдә белеп, ижади эшләй алған уҡытыусылар ғына һәйбәт һөҙөмтәләргә өлгәшә. Мәктәп ошондай педагогик кадрҙар менән тәьмин ителмәһә, туған телдәрҙе уҡытыуҙа ла алға китеш булмаясаҡ. Әлегә байтаҡ ҡына урындарҙа башҡорт телен өйрәтеү ошо предмет буйынса махсус белеме булмаған уҡытыусыларға йөкмәтелгән. Әлбиттә, башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыла башлағас, кадрҙар ҡытлығы киҫерелде. Көрсөктән сығыр өсөн Башҡортостан Республикаһының мәғарифты үҫтереү институтында, педагогия вуздарында башҡорт теле буйынса бер йыллыҡ курстар ойошторолдо, әммә уларҙы ваҡытлы күренеш, тип аңларға кәрәк. Хөкүмәт комиссияһы артабан бар мәктәптәрҙе лә тулы махсус белеме булған тел уҡытыусылары менән тәьмин итеүҙе мотлаҡ үтәлергә тейешле бурыс итеп ҡуйҙы. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Раил Әсәҙуллин был мәсьәләне хәл итеү өсөн район һәм ҡалаларҙан махсус йүнәлтмә менән ебәрелеүсе абитуриенттар һанын бермә-бер арттырыу зарурлығын белдерҙе.

Урындарҙағы хакимиәттәргә туған телдәрҙе уҡытыуҙың заманса матди һәм мәғлүмәти-методик базаһын нығытыу тураһында ла даими ҡайғыртыу мотлаҡ. Бөгөн ҡайһы бер мәктәптәрҙә туған телдәрҙә төҙөлгән күрһәтмә-дидактик материалдар ғына түгел, китаптар, һүҙлектәр, башҡа төрлө уҡыу әсбаптары ла етешмәй, китапханаларҙы милли телдәрҙәге әҙәбиәт менән тәьмин итеү барышын да ҡәнәғәтләнерлек, тип әйтеп булмай. Ә хәҙер беҙ мәктәпкәсә йәштәге балаларҙан башлап сығарылыш класс уҡыусыларына тиклем һәр кемде заманса технологиялар нигеҙендә ижад ителгән электрон уҡыу әсбаптарын ҡулланып, үҙ аллы уҡыу алымдарына өйрәтергә тейешбеҙ бит. Замандан артта ҡалыу һис беҙҙең файҙаға түгел икәнлеген онотмау фарыз урындарҙағы хакимиәт һәм мәғариф органдары етәкселәренә.

Бөгөнгө мөхитебеҙҙә юлдарҙа, урамдарҙа, йорттарҙа, төрлө ойошма һәм предприятие биналарындағы дәүләт телдәрендә яҙылған алтаҡталарға, башҡа төрлө яҙма материалдарға иғтибар итмәү мөмкин түгел. Ҡайһы бер объекттарҙа яҙылғандарҙы уҡыйһың да, ни көлөргә, ни әрләшергә белмәйһең. Үҙебеҙҙең Өфө ҡалаһында ошо хаҡта бер туҡтауһыҙ һөйләй-яҙа торғас, хаталар күҙгә күренеп аҙайҙы аҙайыуын. Әммә республикабыҙҙың ҡайһы бер ҡала һәм районында да ошо мәсьәләгә иғтибар итеүселәр аҙыраҡ. Хөкүмәт комиссияһы ултырышында ошо хаҡта етди һүҙ алып барылды. Бигерәк тә Кушнаренко районында, Межгорье ҡалаһында ошондай хаталарҙың күп булыуы аныҡ дәлилдәр менән күрһәтелеп, артабан ошо юҫыҡта маҡсатлы эш алып барыу зарурлығы хаҡында хакимиәт етәкселәренә иҫкәртеү яһалды. Был осраҡта башҡорт телендәге яҙыуҙарға битарафлыҡтан бигерәк урындарҙағы хакимиәттәрҙә, мәғариф һәм мәҙәниәт бүлектәрендә башҡорт телен һәйбәт белеүсе кешеләрҙең булмауын етди сәбәп, тип иҫәпләргә кәрәк.

Ултырышта тикшерелгән райондарҙа республика матбуғатына яҙылыу торошоноң үтә насар булыуы ла билдәләнде, шуға күрә артабан предприятиеларҙа, ойошма һәм учреждениеларҙа ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу буйынса өгөт-нәсихәт эштәрен йәйелдереү, гәзит-журнал мөхәррирҙәре, журналистар менән осрашыуҙар уҙғарыу зарурлығы һыҙыҡ өҫтөнә алынды.

Ултырышта махсус ҡаралмаһа ла, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙа аҙағынаса хәл ителмәгән мәсьәләләр булыуы хаҡында әйтеп уҙырға кәрәктер. Бөгөн маҡсатҡа ярашлы булған, әммә башҡорт телен өйрәнгән башҡа милләт балаларына самаһыҙ ауырлыҡ тыуҙырмаған тел өйрәнеү концепцияһына нигеҙләнеп эш итеү зарур. Төп идея - башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгәндә грамматика мәсьәләләрен арттҡы планға сығарып, уҡыусыны башлыса башҡортса һөйләшергә өйрәтеү. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы башланғысы менән "Башҡорт телен һәм туған телдәрҙе уҡытыуҙың лингвокультурологик концепцияһы" ҡабул ителеүен иҫәпкә алып, яҡын киләсәктә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ошо яңы концепцияның төп принциптарына ярашлы уҡытыуҙы юлға һалыу көнүҙәк мәсьәлә итеп ҡаралырға тейеш.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ТЕЛДӘРҘӘН - БУТҠАМЫ?

...Кабель телевидениеһын ҡараусылар яңыраҡ 11-се каналдан "Туған тел" исеме аҫтында күрһәтелә башланған концерт программаларына, айырым сығыштарға иғтибар итмәй ҡалмағандыр. Мин ҡурай моңо менән башланған был канал тапшырыуҙарына ҙур өмөттәр бағлағайным, әммә өмөттәрем аҡланманы. Бер яҡтан ҡарағанда, коммерция каналына дәғүә белдерергә хаҡым да юҡтыр, әммә унда күрһәтелгән тапшырыуҙар халҡымдың теленә, моңона ҡағыла икән, шымып ҡала алмайым һәм минең генә түгел, күптәрҙән ишеткән уртаҡ фекерҙе еткерергә булдым. Нимә генә күрһәтмәйҙәр унда! "Туған тел" заставкаһы менән ҡурай моңо яңғырап китеүе була, ут күршеләребеҙҙән килгән ижади төркөм татарса менән урыҫсаны бергә ҡушып, арзан зауыҡлы, асылда, иҫереклеккә бәйле юморҙар һөйләргә тотона, йә булмаһа музыкаль клиптарҙа атыша башлай, ир-ат "хур ҡыҙҙары" менән бассейнда мәж килә. Мин был каналда күрһәтелгән концерт номерҙары, башҡа сығыштар барыһы ла насар, уңышһыҙ тип әйтмәйем, әммә ошоларҙың барыһы ла ҡурай моңо менән биҙәлгән "Туған тел" атамаһы аҫтында күрһәтелергә тейеш түгелдер ул, тип уйлайым. Трактор йә автомобиль двигателе менән таныш булғандар ундағы "отстойник" тигән хикмәттең нимәгә хеҙмәт иткәнен бик яҡшы белә. Был каналда иң күбеһе башҡорт һәм татар эстрадаһының бер ерҙә лә "үтмәгән тауары" яңғырай. Беҙҙең "Туған тел"ебеҙ шундай уҡ тауармы ни?

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ БР Хөкүмәтенең киңәйтелгән ултырышында 2010-2012 йылдарға иҫәпләнгән "Ғаилә" республика программаһы ҡабул ителде. Программала ғаиләгә дәүләт ярҙамы күрһәтеү, ғаилә институтын нығытыу буйынса ҡануниәтте камиллаштырыу, социаль-мәҙәни өлкәлә һәм торлаҡ-коммуналь хужалығында капиталь төҙөлөш объекттарын бюджеттан инвестициялау планлаштырыла. Программаға ярашлы халыҡты эш менән тәьмин итеү, сәләмәтлекте һаҡлау, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау, балалы ғаиләләрҙе социаль хеҙмәтләндереү һәм яҡлау, ғаилә сәйәсәте мәсьәләләрен фәнни яҡтан тикшереү буйынса төрлө саралар уҙғарыу күҙаллана. 2010 йылда ошо программаны финанслауға 20 миллиард һум аҡса бүленәсәк.

✓ БР Хөкүмәтенең сираттағы ултырышында "Сәләмәтлек" өҫтөнлөклө милли проектының үтәлеше, халыҡты дарыуҙар менән тәьмин итеүҙең нисек бойомға ашырылыуы ҡаралды. Премьер-министр Р. Сарбаев билдәләүенсә, был проект медицинаның профилактика йүнәлешен тергеҙеү, һаулыҡ һаҡлау системаһының беренсе звеноһын нығытыу һәм медицина хеҙмәткәрҙәренең үҙ эшенең һөҙөмтәле булыуына ынтылышын арттырыу форсатын биргән аҙымға әйләнде.

✓ Башҡортостан Республикаһы өсөн сит илдәрҙә кадрҙар әҙерләүҙең һөҙөмтәле системаһын булдырыу маҡсатында БР Президенты Мортаза Рәхимов Указы менән Башҡортостан Республикаһында 2010-2012 йылдарға сит илдәрҙә кадрҙар әҙерләү, ҡайтанан әҙерләү һәм камиллаштырыу буйынса Президент программаһы раҫланды.

✓ Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты делегацияһы Европаға юлланды. Ул "Донъя халыҡтары мәҙәниәте диалогы" халыҡ-ара акцияһында ҡатнашасаҡ. Акция сиктәрендә Германия, Франция, Швейцария һәм Италияла Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары ҡатнашлығында республика презентацияһы үткәреләсәк, Башҡортостан тураһында күргәҙмә ойошторолаcаҡ.

✓ Башҡортостанда туризмды индустриаль тәьмин итеү ғилми-етештереү кластеры төҙөлә. Был эш республикала туризм индустрияһын үҫтереү маҡсатында башҡарыла. Беҙҙең ерлектә туризм кластерын формалаштырыу Башҡортостандың сәнәғәт сәйәсәтен үҫтереү буйынса башҡорт-немец проектының бер өлөшө булып тора.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ГРЫЗЛОВ ҺӘМ ПЕТРИК - РӘСӘЙ ӨСӨН "ТАҘА ҺЫУ",

## йәки Ун биш триллион һумды нисек бүлергә була?



Эйе, мин риза - Рәсәй халҡы Калининградтан алып Камчаткаға тиклем таҙа һыу эсергә хаҡлы һәм лайыҡлы. Эйе, кешеләр таҙа һыу эсмәһә, сирләй. Уларҙың ауыры балалары тыуа. Эйе, бөгөн Рәсәйҙәге торлаҡ йорттарҙың күбеһендә крандан аҡҡан һыуҙы таҙа, тип әйтеп булмай. Эйе, был мәсьәләне нисектер хәл итергә кәрәк. Һәм был йүнәлештә бөгөн эш алып барыла. Төрлө урында төрләсә. Әммә алып барыла. Таҙа һыуҙы бөгөн һатып алып була. Уны баллондарға дәүләт түгел, эшҡыуарҙар тултыра. Халыҡҡа - таҙа һыу, бизнесмендарға - табыш. Бөтәһе лә ҡәнәғәт. Кем теләй, кемдең мөмкинлеге бар - шул һыуҙы һатып ала, теләмәй, йәки аҡсаһы етмәй икән, крандан аҡҡаны ла эсергә яраҡлы. Ҡабатлам әйтәм - яраҡлы. Файҙалы түгел. Я-раҡ-лы. Йәғни, ҡайнатып эсһәң, һыуһыңды ҡандырырға мөмкин.

Әммә Рәсәй халҡы борсолорға тейеш түгел. Был хаҡта көнө-төнө уйлаған, уны таҙа һыу менән тәьмин итергә хыялланып йөрөүселәр юҡ түгел илебеҙҙә. Бар. Шуныһы ҡыуаныслы - улар яңғыҙ түгел. Ә икәү. Улар тинтәк түгел - аҡыллы. Ә иң мөһиме, ул икәүҙең көмендә берәүһе дәүләт ҡаҙнаһына яҡын. Ул хатта илебеҙҙең бюджетын бүлеүҙә ҡатнаша ала. Ул - Борис Вячеславович Грызлов. Икенсеһе иһә - Виктор Иванович Петрик.

Борис Грызловты бөтәгеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙ. Ә бына Петрик менән яҡындыраҡ танышырға кәрәктер. Уның биографияһында "аҡ тап"тар күп. Бер сығанаҡтарға ярашлы, ул Житомир өлкәһенең ауылдарының береһендә, ә икенселәргә ҡарағанда иһә, Житомирҙың үҙендә тыуып үҫкән. Үҙе һөйләүенсә, 1975 йылда Ленинград университетының психология факультетын тамамлаған. Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Петрик шул уҡ йылдарҙа шул уҡ университеттың физика факультетында белем алырға самалаған, әммә бер нәмә лә килеп сыҡмаған. Әйткәндәй, 1973 йылда Ленинград юғары уҡыу йорттарының береһен Борис Вячеславович Грызлов та тамамлай түгелме?

1984 йылда Петриктың эҙмышы ҡырҡа үҙгәрә - уға төрмә "университеттарын"

**Йәмәғәт, баштан уҡ иҫкәртеп ҡуям. Беренсенән, мин көслө һәм сәләмәт кешеләр йәшәгән Рәсәйгә бер нисек тә ҡаршы түгелмен. Икенсенән, мин ошо мәҡәләне үҙ теләгем менән яҙҙым һәм уның өсөн миңә бер ниндәй ҙә сит ил ойошмаһы аҡса түләмәй. Ғөмүмән, "Аҙна шаңдауы" рубрикаһында донъя күргән мәҡәләләрҙә мин бер нәмәне лә уйлап сығармайым - бары тик Рәсәй ваҡытлы матбуғат сараларында баҫтырылған хәбәрҙәргә ҡарап күҙәтеп барам һәм шулар нигеҙендә аҙна арауығында айырыуса көслө шаңдау булып яңғыраған берәй ваҡиға хаҡында үҙ фекеремде белдерәм. Алдан иҫкәртеүемдең сәбәбе шул - был мәҡәләлә телгә алынасаҡ бер кеше үҙе һәм ул тәҡдим иткән программа хаҡында тәнҡит күҙлегенән сығып яҙыусыларҙы... көслө һәм сәләмәт халҡы булған Рәсәйгә ҡаршы сығыусылар тип ҡабул итә. Шуға ла ҡабатлап әйтәм - мин ундай Рәсәйгә ҡаршы сыҡмайым.**

үтергә тура килә. Мутлыҡ ҡылғаны, ялған мәғлүмәт бирергә мәжбүр иткәне һәм башҡа күп кенә ҡырын ҡылыҡтары өсөн Виктор Ивановичҡа 11 йылға иркенән мәхрүм итерлә. Енәйәт кодексының ун өс статьяһы буйынса. Әммә рәшәткә артында ун бер йылдың ни бары дүртен генә ултыра ул. 1989 йылдың ғинуарында азат ителә. 1990 йылдарҙың башында Петриктың эҙмышы тағы ла ҡырҡа үҙгәрә. Ул ювелирҙар өсөн яһалма гранаттар, аметистар һәм башҡа минералдар үҫтереү менән шөғөлләнә башлай. 1997 йылда Петрик академик булып китә. Ә 2001 йылда уға техника фәндәре докторы дәрәжәһе бирелә. Улай булмай бит, тимәксегеҙме? Була икән шул. Тағы ла бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. 90-сы йылдарҙа Петрик Санкт-Петербург мэрияһының иҡтисади мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе була. Ошо уҡ осорҙа бында Рәсәйҙең бөгөнгө Премьер-министры ла эшләй түгелме?

Бөгөн Петрик бер юлы биш Академияның академигы иҫәпләнә. Интернеттағы күп һанлы сайттар хәбәр итеүенсә, ул күп кенә ҡаҙаныштарҙа өлгәшкән кеше - автомобилдәр өсөн наноаккумуляторҙар һәм казинола һәр ваҡыт отоу өсөн махсус формула уйлап тапҡан, кешенең ғүмерен 140 йылға тиклем оҙайта алған ер аҫты "Хеопс пирамидаһы"н төҙөп ҡуйған, һәм башҡалар һәм башҡалар.

Ошондай күп яҡлы хеҙмәттәре, төрлө өлкәләрҙәге уңыштары менән дан ҡаҙанған кеше менән Борис Вячеславовичты ниндәй ептәр бәйләй, тип уйлайһығыҙмы? Рәсәй халҡын таҙа һыу менән тәьмин итеү теләге. Бушлай түгел, әлбиттә. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Таҙа һыу" тигән программаһы бар икән. Ошо программаны тормошҡа ашырыу буйынса үткәрелгән конкурста әллә кем түгел, ә Петрик еңеп сыға. Дөрөҫмө, әллә бушмы, әммә Петрик менән Грызловтың радиоактив ҡалдыҡтар менән зарарланған һыуҙы таҙартыу буйынса патент алыуҙары тураһында мәғлүмәт тә бар. Интернетта хатта ул патенттың номеры ла күрһәтелә.

Уйлаһаң, был эштең бер ниндәй ҙә яҙығы юҡ һымаҡ. Борис Вячеславович дәүләт эшмәкәре булараҡ, халыҡтың эҙмышын, һаулығын, киләсәген ҡайғыртырға тейешме? Тейеш. Кеше һыуһыҙ йәшәй алмағаны аңлашыламы? Әлбиттә. Тимәк, Борис Грызлов дөрөҫ юлда булып сығамы? Һис шикһеҙ.

Дөрөҫ, Рәсәй Фәндәр Академияһының ҡайһы бер академиктары Петриктың "асыш"тарын өнәп еткермәй. Уны ялған фән вәкиле, хатта "шарлатан" тип атай. Әммә Борис Вячеславович уларҙы тыңламай. Һәм дөрөҫ эшләй, минеңсә. Бит фән тарихы быңдай миҫалдар менән туп-тулы. Әйтәйек, урта быуаттарҙа Ерҙең үҙ күсәре һәм Ҡояш тирәләй әйләнгәненә берәү ҙә ышанмаған. Бары тик Джордано Бруно ғына. Ә Вавилов? Уны ла бит ваҡытында ҡыуғылап маташҡандар. Ә бөгөн генетика бөтә донъяға билдәле фән. Шуның кеүек үк, Петрикка бөгөн ышанып етмәйҙәр. Әммә киләсәктә (быға мин һәм Борис Грызлов ныҡ ышанабыҙ) Петриктың асыштары донъя фәнендә лайыҡлы урын биләп торасаҡ.

Сөнки...

Ошо урында саҡ ҡына ситкә сигенеп, фәндең үҫешенә көслө йоғонто яһаған, үҙенсәлекле бер катализатор булып торған нәмә хаҡында әйтмәксемен. Ул ниндәйҙер реактив йәки газ түгел. Ул - аҡса. Аңлашылай, аҡса булмаһа, иң оло асыш та ҡағыҙҙа ғына ҡаласаҡ. Әйтергә кәрәк, "Таҙа һыу" программаһын тормошҡа ашырыу өсөн дәүләт ҡаҙнаһынан, ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 15 триллион һум һорағандар, имеш. Йәғни, Петриктың һыуҙы таҙартыу өсөн тәғәйенләнгән фильтрҙары көмендә алтындан эшләнергә тейеш булып сыға. Борис Грызловтың Дәүләт Думаһы Рәйесе булыуын иҫәпкә алһаҡ һәм парламенттыбыҙҙың йыл һайын дәүләт бюджеты тураһында законды ҡарауын иҫкә төшөрһәк, был программаға аҡса ваҡытында һәм тейешле кимәлдә бүленәсәге шикһеҙ. Был хәлде ҡайһы бер журналистар ҡаҙна аҡсаһына ҡул һуҙыу, ә ябайыраҡ әйткәндә, күҙгә ташланып торған коррупция, тип атай.

Илебеҙҙең өр-яңы тарихына күҙ һалайыҡ әле. Советтар Союзы тарҡалғас, уның хужаһыҙ ҡалған мөлкәтенә, ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтарына ҡул һалыусылар бөгөн донъяның иң бай йөҙ кешеһе исемлегендә. Борис Ельцин етәкселектән киткәс, дәүләтебеҙ милкен ҡабаттан бүлеү башланды. Бөгөн иһә бүлер нәмә ҡалмағас, өсөнсө тулҡын дәүләт ҡаҙнаһына, йәғни беҙҙең, һалым түләүселәрҙең, аҡсаһына ҡул һуҙа. Күрәһең, "Таҙа һыу" программаһы ана шундай проекттар иҫәбенән. Тағы ла бер проект - Мәскәү янында ғына инновациялар үҙәге - Рәсәйҙең Силикон үҙәнен булдырыу тураһында ла һүҙ ҡуйырғандан ҡуйыра.

Саҡ ҡына көтәйек әле. Йә Петрик һәм Грызлов донъяның иң бай кешеләр исемлегенә инәсәк, йә беҙ, хөрмәтле йәмәғәт, был тормошто белеп еткермәйбеҙ.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Рәсәй Һаҡлыҡ банкыһының Урал банкы рәйесе Владимир Черкашин менән эш осрашыуы уҙғарҙы. Осрашыу барышында ошо банкының республика территорияһындағы эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре һәм киләсәктә эш алып барыу планы тикшерелде. Премьер-министр, Башҡортостан халҡының 40 процентының ауылда йәшәүен иҫәпкә алып, ошо банк хеҙмәтләндереүен ауыл мөхитендә лә һаҡлап ҡалыу зарурлығын билдерҙе. Банк етәксеһе ошо маҡсатта Рәсәйҙә ойошторыласаҡ 50 күсмә кассаның 18-е Башҡортостанда эшләйәсәк, тип ышандырҙы.

✓Башҡортостан Республикаһының дүртенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың егерме өсөнсө ултырышында БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев 2009 йылдағы эш һөҙөмтәләре буйынса отчет яһаны. Былтыр Башҡортостанда сәнәғәт, агросәнәғәт йүнәлештәрендә күп эштәр башҡарылған, 2352 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән. Шулай уҡ Хөкүмәт Премьер-министры ғаиләләргә игтибарҙың ҙур булыуын, инновацион эшмәкәрлектең йылдам барыуын, кесе эшҡыуарлыҡтың үҫеш кисереүен, "Башҡортостандың социаль картаһы" проектының уңышлы ғәмәлгә ашырылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓Башҡортостандың ҡотҡарыу хеҙмәте яҙғы ташҡынға әҙер. Март башынан уның хеҙмәткәрҙәре боҙ киткәндә һәм яҙғы ташҡын ваҡытында эҙләү-ҡотҡарыу эштәрен ойоштороу буйынса күнекмәләр үткәрә башланы. Өфө, Белорет, Дүртөйлө, Күмертау, Сибай, Туймазы ҡалаларында алты ҡотҡарыу отряды булдырылған. Ташҡынға ҡаршы көрәш өсөн 2,5 миллион һум аҡса бүленгән.

✓Ванкуверҙа X Паралимпия уйындары Рәсәй спортсыларының триумфы менән тамамланды. Улар бөтәһе 38 миҙал - 12 алтын, 16 көмөш һәм10 бронза миҙал яулап, донъя кимәлендә дан-хөрмәткә лайыҡ булды. Дүрт алтын һәм бер көмөш миҙал кавалеры, Башҡортостан егете Ирек Зариповҡа Паралимпия уйындарын ябыу хоҡуғы бирелде. Мишкә егете Кирилл Михайлов та яҡташынан ҡалышмайынса, өс алтын һәм ике көмөш миҙал менән бүләкләнде.

✓Боҙ спидвейы буйынса Берлинда уҙғарылған 45-се донъя чемпионатында яҡташыбыҙ Николай Красниковҡа тиңләшә алыусы булманы. Һөҙөмтәлә ул, легендар спортсыбыҙ Ғабдрахман Ҡадыров кеүек үк, боҙҙа уҙышыу буйынса шәхси беренселектә 6 тапҡыр донъя чемпионы исемен яуланы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БУРЫСТАР ТҮЛӘНӘСӘК

**Яҡын арала ауыл ерендә эшләүсе уҡытыусыларға торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр сығымы өсөн компенсация буйынса бурыстар түләнәсәк. Был турала БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев белдерҙе.**

БР-ҙың "Ауыл ерендә йәшәүсе һәм эшләүсе белгестәргә социаль ярҙам саралары тураһында"ғы законына үҙгәрештәр индерелеү сәбәпле, компенсация күләме 178 һумдан 711 һумға, ә компенсация алыусылар һаны 46 меңдән 49 меңгә тиклем артты. Республика бюджетында бындай күтәрелеш ҡаралмағанға күрә, сығымдар муниципалитеттарға һалынғайны. Улар, үҙ сиратында, бындай сумманы түләй алманы һәм 1 ғинуарға 289 миллион һум күләмендә бурыс йыйылды. "Аҙна-ун көн эсендә йыл башынан йыйылған бурыс түләнәсәк, - тип белдерҙе Раил Сарбаев. - Хөкүмәт быны үҙ өҫтөнә ала. Әммә артабан компенсацияны муниципаль власть органдары ваҡытында түләргә тейеш буласаҡ".

## ИҢ ТҮБӘН ХАҠ БЕҘҘӘ

**2010 йылда торлаҡ-коммуналь хеҙмәт өсөн түләүҙәр республика буйынса уртаса 13,5 процентҡа артҡан. Әммә республиканың ҡайһы бер район һәм ҡалаларында был күрһәткестәр күпкә юғарыраҡ.**

БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев әйтеүенсә, һыу, һыу бүлеү, сүпсар сығарыуҙан тыш, башҡа тарифтарҙы урындағы власть билдәләмәй.

- Әгәр ҙә газға хаҡтар күтәрелһә, төбәктәрҙә лә уның хаҡы күтәрелә. 1 апрелдән газдың тағы ла 15 процентҡа күтәрелеүе көтөлә. Тимәк, беҙҙең предприятиелар ҙа был хаҡ сәйәсәтенә эйәрергә тейеш була.

Башҡа түләүҙәрҙән айырмалы рәүештә, электр энергияһына хаҡтар күберәк күтәрелгән, был тигеҙләү процесы менән бәйле, йәғни, элекке кеүек, халыҡҡа күрһәтелгән коммуналь хеҙмәттәрҙең ҙур өлөшөн юғарыраҡ ставкалар буйынса түләүсе сәнәғәт предприятиелары капламай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, республикала электр энергияһына тариф Волга буйы округында иң түбәне булып ҡала. Бөгөн ҡалала йәшәүселәр электр өсөн 1 һум 74 тин түләһә, ауыл ерендә 1 киловатт 1 һум 21 тин тора.

Раил Сарбаев муниципаль берләшмәләрҙә тарифтар төрлөсә булыуын да телгә алып үтте. Мәҫәлән, Салауатта йылылыҡ энергияһы 40 процентҡа күтәрелгән булған. Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса комиссияһына муниципалитеттарҙағы торлаҡ-коммуналь хеҙмәтенә хаҡтарҙы анализлау бурысы йөкмәтелгән.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Һуңғы көндәрҙә Башҡортостан йәмәғәтселеге өсөн бик әһәмиәтле булған ижтимағи саралар уҙғарыла, һәм был әлегә тиклем һәүетемсә генә барған йәшәйешебеҙҙә яңы ынтылыш һәм ҡуҙғалыш сатҡылары тоҡандыра. Республикабыҙҙың төрлө тарафтарында бер-бер артлы урындағы ҡоролтайҙарҙың сираттағы йыйындары саҡырылып, халҡыбыҙҙың хәл-торошо асыҡланып, йәмәғәт ойошмаһының эштәре барланып, хәл итеүҙе талап иткән мәсьәләләр буйынса фекер алышыу бик әүҙем бара. Был йыйындарҙа III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерләнеү унайы менән халҡыбыҙҙың социаль-иҡтисади һәм рухи-мәҙәни үҫешенә булышлыҡ итеү тураһында эшлекле тәҡдимдәр яңғырай, алда торған оло форумға делегаттар һайлана.**

# НИСЕК БУЛДЫРА...

## шулай көн итә халыҡ

Яңыраҡ республикабыҙҙың төньяҡ-көнсығышын төйәк иткән Балаҡатай районы башҡорттары ла үҙҙәренең сираттағы йыйынын уҙғарҙы. Тәбиғәтенең ҡырыҫлығы һәм бер үк ваҡытта иң киткес гүзәллеге менән дан тотҡан был төбәкте элек-электән азатлыҡ һөйөүсе, ватансыл һәм эшсән халҡыбыҙҙың бала һәм оло ҡатай, әйле, дыуан, ҡошсо ырыуҙары вәкилдәре үҙ иткән, ошо ерҙәрҙә түл йәйгән, нәҫел ишәйткән, илен һәм ерен һаҡлап, яу сапҡан, үҙ иленең һәм халҡының ҡанундарына тоғролоҡ һаҡлап йәшәгән. Әлбиттә, заман - башҡа, заң - башҡа, тигәндәй, хәҙерге осорҙоң кире йоғонтоһонан байтаҡ зыян да күргән кешеләр йәшәй бында. Улар үҙ йыйындарына нәҫел-нәсәбтәренең, ырыуҙаш-яҡташтарының киләсәген уйлап, изге өмөттәр менән йыйылды ла инде.

Йыйында ҡатнашыусылар алдында БР Президенты Хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш һәм мәғлүмәт сәйәсәте идаралығы начальнигы Данил Азаматов сығыш яһап, III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек барышында башҡорт йәмәғәтселегенең әүҙемләшеүен һәм республикабыҙҙың сәйәси һәм мәҙәни үҫеше өсөн унайлы шарттар барлыҡҡа килеүен билдәләне. Балаҡатай районы хакимиәтенең яңы башлығы Павел Меньшиков, үҙе лә ошо үҙенсәлекле төбәктә тыуып үҫеп, идара итеү өлкәһенең нескәлектәрен ғәмәли яҡтан һәйбәт үҙләштергән етәксе булараҡ, халыҡ талаптарын, уның көндәлек ихтыяждарын яҡшы аңлай. Халыҡ йыйынындағы сығышында ла, күҙмә-күҙ әңгәмәләшеп ултырғанда ла ул төбәк үҫешенә тотҡарлыҡ итеүсе ауырлыҡтарҙы нисек тә булһа үтеп сығыуҙы хакимиәттең дә, үҙенең дә төп бурысы итеп иҫәпләүен белдерҙе.

Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш төбәге өсөн иң ауыр һәм хәл иткес проблемаларҙың береһе - йәштәрҙең ситкә китеүе, ауылдарҙа мәктәп йәшендәге балаларҙың аҙайыуы арҡаһында мәктәптәрҙең ябылыуға дусар булыуы. Был мәктәптәрҙә йөн башына ҡарап финанслауға күсеүҙең, ямanaты сыҡҡан ҡулайлаштырыу программаһының ауыл мөхите өсөн емергес факторға әйләнеүен күрһәтә. Балаҡатай районы башҡорттары үҙ йыйынында ошо хаҡта бик әсенеп-әҫәрләнеп һөйләне, власть органдарынан ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу маҡсатында мөмкин булған бөтә сараларҙы ҡулланыуҙы һораны. Йыйында ҡатнашыусыларҙың иҫкергән мәктәптәрҙе реконструкциялау, яңы мәктәп һәм балалар баҡсаларын төҙөү буйынса һорауҙары ла бик урынлы. Мәктәптәр ябылғас, балалар баҡсалары булмағас, мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы ла уҡыусылар менән бергә икенсе ауылға йөрөтөргә мәжбүр була халыҡ. "Беҙҙең төбәктә ауылдар араһы бигүк яҡындан түгел, ҡышын буранлы йыш сыға, шул арҡала район авто-юл хужалығы көн һайын тиерлек ауылдарға барған юлдарҙы таҙартыу менән мәшғүл. Был үҙе үк бик күп сығымдар талап итә", - тине район хакимиәте башлығы. Ул ауылдарҙан йөрөп уҡыусы балаларҙың ҡайһыларын интернатҡа урынлаштырыуҙары хаҡында ла әйтеп үтте. Ысынлап та, ошо проблеманы артабан һәйбәт йыһазландырылған интернаттар асыу аша хәл итеү мөмкинлеге тураһында ла уйларға кәрәктер.

Балаҡатайҙар йыйынында халыҡты борсоған башҡа мәсьәләләр ҙә күтәрелде. Электән төбәктә сәнәғәт, ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү предприятиелары булмағас, колхоз-совхоздар тарҡалыу менән ауыл халҡы үҙе нисек булдыра ала, шулай көн итергә мәжбүр. Иң аяныслыһы - төпкөл ауылдарҙа йәшәүсе кешегә тир түгеп үҫтергән уңышын, һөт, май-ҡаймағын, етештергән итен тоторо̧ҡло баҙар хаҡына тапшырырлыҡ бер генә дәүләт предприятиеһы ла булмауы. Ауыл кешеләренең күбеһе үҙен-үҙе генә тәьмин итеп йәшәүсе шәхси натураль хужалыҡ менән ҡәнәғәтләнеп көн итергә мәжбүр бөгөн. Тап шуның арҡаһында яҡшы тормош эҙләп, ситкә китеүселәр, йөрөп эшләүселәр күбәйә, был ғаилә тарҡалыуына ла сәбәп була. Бына ошондай ҡатмарлы, әммә нисек булһа ла хәл итеүҙе талап иткән проблемалар борсой бөгөнгө ауыл халҡын. Халҡыбыҙҙың оло форумында ошо турала ла мотлаҡ һүҙ булырға, етәкселәр иғтибарына еткерелергә тейештер.

Балаҡатай районы башҡорттары ҡоролтайы оло ҡоролтайға делегаттар һайлау менән тамамланды. Уларҙың һәр береһе үҙ программаһы менән сығыш яһап, делегатлыҡҡа ниндәй ерлектә дәғүә итеүен белдерҙе. Шулай итеп, Балаҡатай төйәгенән III ҡоролтайға күпселек тауыш алған Саяф Абдрахманов, Әмир Ситдиков, Айрат Дилмөхәмәтов, Рәүил Ғәлимов һәм Лилиә Йосопова һайланды. Балаҡатай делегаттары киләсәктә лә үҙ эштәре менән тыуған төйәген тергеҙеүгә, ата-бабаларының боронған ҡалған рухи-мәҙәни мирасын һаҡлауға лайыҡлы өлөш индерер, тип ышанайыҡ.

Бәҙри ӘХМӘТОВ.

БӘЙ-БӘЙ!

## ҠУНАҠ МӨҘҘӘТЕ ӨС КӨН...

**Республикала Федераль миграция хеҙмәтенең башҡа ведомстволар менән берлектә үткәргән "Сит ил кешеһе" операцияһы тамамланды.**

Операция барышында республика буйынса сит ил граждандарын хеҙмәткә йәлеп итеүсе 1800 эш биреүсе тикшерелде, закон боҙоусы 4 меңдән ашыу сит ил гражданына протокол төҙөлдө һәм 6 миллион һумдан ашыу штраф һалынды. Бынан тыш, операция барышында 10 енәйәт эше асыҡланды.

Мәскәүҙә Черкизов баҙары ябылғандан һуң күп кенә Вьетнам, Ҡытай граждандары Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә таралды һәм был күренеш беҙҙең республиканы ла урап үтмәне. 2010 йылдың 1 ғинуарына республикала эшләүсе Вьетнам граждандарының һаны 2305-кә еткән. Уларҙың 92,3 проценты (2128 кеше) сит ил граждандарына ҡәтғи тыйылған булыуға ҡарамаҫтан, сауҙа өлкәһендә, башлыса, "Дим", "Төньяҡ" сауҙа комплекстарында эшләй.

Шуға күрә лә Федераль миграция хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралағы халыҡҡа мөрәжәғәт итә. Кем Вьетнам, Ҡытай халыҡтары йәшәгән, эшләгән урындарҙы белә, 237-14-80, 237-46-08, 237-06-00, 279-47-80 телефондары буйынса идаралыҡҡа шылтыратып, мәғлүмәт ҡалдырыуығыҙҙы һорайбыҙ. Шулай уҡ www.fmsrb.ru сайты ла һеҙҙең ҡарамаҡта.

Салауат ХИЛАЛОВ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Һаулыҡ һаҡлау буйынса Республика советының күсмә ултырышы быйыл көҙ Өфө ҡалаһында уҙғарыласаҡ. Мөһим сараға әҙерлек барышында Республика онкология клиник диспансерында хирургия, Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында 120 койкаға иҫәпләнгән акушер-гинекология корпустарын төҙөп бөтөү, Туберкулезға ҡаршы диспансерҙы һәм Республика психиатрия дауаханаһын медицина ҡорамалдары менән йыһазландырыу ҡаралған. Һаулыҡ һаҡлау объекттарында капиталь ремонт һәм төҙәкләндереү эштәре өсөн 1,2 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтеләсәк.

✓Рәсәй Хөкүмәте ултырышында пенсияны өҫтәмә индексациялау хупланғайны. 1 апрелдән Рәсәйҙә пенсия 6,3 процентҡа индексацияланып, уртаса алғанда 500 һум самаһына артасаҡ.

✓Автомобиль юлдарын һаҡлау маҡсатында яҙғы юл өҙөклөгө осоронда, 1 апрелдән 5 майға тиклем, дөйөм файҙаланыуҙағы юлдар буйлап ауыр транспорт сараларының хәрәкәтен сикләү индерелә.

✓28 мартта йәкшәмбегә ҡаршы төнгә 2 сәғәттә Рәсәй территорияһында йәйге ваҡытҡа күсеү маҡсатында сәғәт телдәре бер сәғәткә алға күсерелә.

✓Өфөлә Башҡортостан уҡытыусыларының X съезы тамамланды. Унда төрлө мәғариф идаралыҡтары органдарынан, дәүләт белем биреү учреждениеларынан, башланғыс һәм урта һөнәри белем биреү уҡыу йорттарынан, ата-әсәләр комитеттарынан 600-ләп кеше ҡатнашты. Съезда мәғариф өлкәһендәге актуаль проблемалар тураһында һөйләшеүҙәр булды, оптималләштереү шарттарында яңы стратегик пландар билдәләнде.

✓Башҡорт дәүләт университетының ректоры итеп химия фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы вице-президенты Әхәт Мостафин билдәләнде. Ректор һайлауҙа БР Президенты Мортаза Рәхимов, Рәсәй Белем биреү учреждениелары идаралығы етәксеһе Петр Анисимов, вуздың уҡытыусылары ҡатнашты.

ҺУҒЫШТЫ КҮРАЛМАЙЫМ...

# ИҢ ЯҠЫН КЕШЕЛӘРЕБЕҘҘЕ ЮҒАЛТТЫҠ



**1941 йылда мин 3-сө класты тик яҡшы билдәләргә генә тамамларға торған бик бәхетле бер ҡыҙ инем.**

Ошо йылдың июнь баштарында атайым Шәмсетдинов Ғәлиастанды үҙебеҙҙең Баймаҡ районына һәүәҫкәр таланттар йыйырға ебәрҙеләр. Шул йылда Мәскәүҙә Башҡортостан мәҙәниәте һәм сәнғәте көндәре үтергә тейеш ине. Атайым мине лә алып ҡайтты. Түбә руднигына килеп, бер аҙна тирәһе булғайныҡ, һуғыш башланды. Атайым ашығыс рәүештә кире Өфөгә китте. "Мин һуғышҡа китәсәкмен. Әсәйең бында ҡайтыр, туғандар янында булырһығыҙ", - тип, мине ҡалдырып китте. Ул 24 июлдә һуғышҡа китеп тә барҙы. Уның артынан бер-бер артлы бындағы туғандар ҙа - атайымдың Шәкирйән ағаһы, Ғәлләметдин еҙнәһе, Күсейҙән Зәйнулла еҙнәй һуғышҡа китә башланы. Әсәйемдең ағаһы Насыров Зиннәтулла бабайым үҙенең аты менән Башҡорт дивизияһына эләкте. 1939 йылдан алып Хабаровскиҙа хеҙмәт иткән Шәмсетдинов Фәхрислам ағайымды ла фронтҡа ебәрҙеләр.

Ир-ат һуғышҡа китеп бөткәс, бөтә эш ҡатын-ҡыҙҙар иңенә төштө. Беҙгә, балаларға, үҫмерҙәргә лә уйнап йөрөү эләкмәне.

Һуғыш башланыуға күп тә үтмәне, фронттан ҡара ҡағыҙҙар килә башланы. Ҡайғылы хәбәр беҙҙе лә урап үтмәне. 1943 йыл атайымдың ҡара ҡағыҙы килде. Ул Белоруссияның Гомель өлкәһендә һәләк булды. Күп тә үтмәне, Зиннәтулла бабайымдың да үлем хәбәре килде. Беҙ иң яҡын ике кешебеҙҙе юғалттыҡ. Оло ҡайғынан әсәйем йәҡонан яҙҙы. Йөклап китһә, йәҡо аралаш зарлы итеп йырлаусан булып китте. Мин уны илап уята торғайным. Ғәлләм бабай башынан яраланып ҡайтып килде. Яраһында йомортҡа һыйырлыҡ соҡор булды. Соҡор эсендә йөка ғына тиреһе һулҡылдап тора торғайны. Ә Зәйнулла еҙнәм һул ҡулын өҙҙөрөп ҡайтты.

Еңеү көнө килде. Клуб алдына халыҡты митингыға саҡырҙылар. Беҙҙе, балаларҙы ла, мәктәптән алып барҙылар, был көн укыу булманы. Һуғыш бөтөүенә ҡыуандыҡ. Улдарын юғалтҡан әсәләр, тол ҡалған ҡатындар, аталары үлгән балалар күҙ йәштәрен түгеп ҡаршыланы был көндө.

1946 йылда күкрәктәрен орденмиҙалдар менән биҙәп, Шәкирйән бабай менән Фәхрислам ағай ҡайтып инде.

Хәҙер уларҙың береһе лә яҡты донъяла юҡ инде. Улар ил өсөн һуғышты, һуғыштан һуң илде аяҡҡа баҫтырыуға ла бөтә көсөн һалды. Улар тураһында минең күңелемдә иң яҡты хәтирәләр һаҡлана. Тыуған ил өсөн ҡорбан булған атайым менән Зиннәтулла бабайымды бер ваҡытта ла онотмайым.

Әле лә бит ерҙә тыныслыҡ юҡ. Афғанстанда, Чечняла беҙҙең күпме егеттәребеҙ һәләк булды. Һуғыш тик юғалтыуҙар, ҡайғы алып килә. Минә хәҙер 80 йәш. Өс улым, бер ейәнем ил алдындағы бурыстарын теүәл үтәп ҡайтты. Тағы ике ейәнем, бүләрәрем бар. Уларҙың шул мәхшәрҙе күрмәүен теләйем.

**Сәлимә ШӘМСЕТДИНОВА.**

# ШИҒЫРЫМДА - ЙӨРӘК ӘРНЕҮЕМ

**Мин - бәхетле, сөнки һуғыш тураһында китаптарҙан ғына уҡып беләм. Талха Ғиниәтуллиндың бөтә повестарын тетрәнеп укып сыҡтым. Ул һуғышты бик оҫта һүрәтләй, булған ваҡиғаларҙы яҙа, шуға күрә лә уның әҫәрҙәре бик көслө, тәьҫирле. Уның әҫәрҙәрендә һуғыш бөтә тулылығы, аяуһыҙлығы, дөрөҫлөгө менән һүрәтләнә: яҡын дуҫтарыңды юғалтыу ҡайғыһы ла, үҙ ғүмереӊ өсөн ҡурҡыу тойғоһо ла асыҡ сағыла. Һуғышта кеше ғүмере бер ни тормай, үлгәндәр тереләр өсөн күпер булып ята, кемдер аҡылдан яҙа, кемдер дошманға һатыла... Әсе дөрөҫлөк. Һуғыш дөрөҫлөгө...**

Ҡәһәрле һуғыш беҙҙең нәҫелебеҙҙе лә урап үтмәгән. Иң аҡыллы, белемле бабайҙарым Әхиәр, Ғәлиәскәр сит ерҙә ятып ҡалған. Олатайым Миңлеғәле Батталов та Харьков өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа хәбәрһеҙ юғалған. Хәҙисә ҡартинәйемдең береһенән-береһе матур, көслә дүрт улдарынан Йомаҙил бабайыма ғына кире әйләнеп ҡайтырға насип булған. "Өмөт" тигән шиғырым - барығыҙҙың да йөрәк әрнеүе. Уны һеҙгә лә тәҡдим итәм:

Оло юлдан күҙен алмайынса,
Һанай-һанай үткән йылдарын.
Көттө әләсәйем сит ерҙәрҙә,
Ятып ҡалған ғәзиз улдарын.

Ҡайтырҙар, тип көтөп, һанай торғас,
Тиҫбеләре инде шымарҙы.
Нисә тапҡыр көҙөн оҙатып ул,
Ҡаршылаңы осор ҡоштарҙы.

Нисә тапҡыр төнөн, айҙай балҡып,
Уянды ул күреп, ал төштәр.
Өмөтләнде: "Минең аҡҡоштарым
Бына-бына ҡайтып төшөрҙәр".

Ғүмер - боҙбармаҡтай, йылдар - тамсы,
Һүнә барҙы уның күҙҙәре.
Таштай ғына булып күңелдәргә
Ятты инде һуңғы һүҙҙәре:
Бәхил булың, китәм улдарыма,
Ҡайта алманы бит үҙҙәре.

**Гөлсирә ШАФИҠОВА.**
**Мәсетле районы**
**Юныс ауылы.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ИМТИХАН - ЕТДИ МӘСЬӘЛӘ

**Берҙәм дәүләт имтиханына ҡайһы бер үҙгәрештәр индерелгән, тип ишеткәйнем. Шул хаҡта яҙһағыҙ ине.**

-Рус теле һәм математика, элекке кеүек үк, мотлаҡ БДИ тәртибендә тапшырыласаҡ. Уларҙың береһенән "икеле" алыу укыусыны аттестаттан мәхрүм итеүе бар. Белемен артабан дауам итергә теләүселәр үҙҙәре һайлаған фәндәрҙән дә БДИ тапшыра. Киләсәктә үҙҙәре укырға инәсәк вуз йәки урта махсус укыу йорто талаптарына ярашлы һәм һайлаған специальность төрөнә ҡарап, укыусы үҙе теләгән бөтә фәндәрҙән дә БДИ тапшыра ала, сикләү юҡ.

Төп үҙгәрештәр түбәндәгеsә:

- элекке кеүек, бер юлы бөтә вуздарға ла ғариза һәм документтар биреү тыйыла, норма буйынса хәҙер биш вуз һайларға һәм һәр береһендә өсәр конкурста ҡатнашырға мөмкин;
- вузға ҡабул итеү өс этаптан торһа, хәҙер ул икәүгә ҡалдырылды;
- вуздар профиль, шул уҡ ваҡытта профиль булмаған фәндәрҙән дә минималь балдар системаһы булдырыу хоҡуғы алды;
- вузға инеү буйынса имтихандарҙың яңы иҫәбе юғары белем биреүҙең яңы стандарттарына яраҡлаштырылған, шуға күрә имтихандар аҙыраҡ була;
- маҡсатлы ҡабул итеү буйынса укырға инеүселәр өлөшө 30 проценттан 20-гә кәметелде.

Тағы ла бер мәсьәләгә иғтибарығыҙҙы йүнәлтеү мөһим: гәзиттә, БДИ алдынан һәр төрлө "тренинг"тар ойоштороп, абитуриенттарҙан бик күп аҡса "һауыусылар" күбәйеп китә. Ә асылда иһә БДИ-ға әҙерлек буйынса тулы һәм бушлай мәғлүмәтте БДИ-ның рәсми мәғлүмәт порталында табырға була:

Математиканан БДИ буйынса асыҡ күнегеүҙәр банкы, файҙалы кәңәштәрҙе сайттан ҡарағыҙ. Алданмағыҙ: китап магазиндары кәштәләренә, йәнәһе, 2010 йылғы БДИ күнекмәләре тип сығарылған һәр төрлө укыу әсбаптары сығып ятты. Был күрәләтә алдау, сөнки имтихан материалдары ҡәтғи мәғлүмәт хәүефһеҙлеге саралары ҡулланылып эшләнә, шуға ла уларҙың алдан мәғлүм булыуы мөмкин түгел.

## УЧАСТКАМДЫ ҺАТҠАНДАР...

**Бәләкәй генә йорто булған ер участкабыҙҙа баҡса үҫтерә инек. Шулай тура килде: беҙ унда биш йыл самаһы бара алмай торҙоҡ, взностарҙы ла түләмәнек. Бурысыбыҙҙы түләргә тип килһәк, участкабыҙҙа ниндәйҙер кешеләр йәшәп ята. Баҡсасылар идараһында беҙгә, участкағыҙҙы уларға һаттыҡ, тинеләр. Идара дөрөҫ эшләгәнме?**

- Хатығыҙҙан аңлашылыуынса, баҡсағыҙҙы һатып, дөрөҫ эшләмәгәндәр. Баҡсасылар идараһы һеҙҙе ер участкағыҙға хоҡуғығыҙҙан мәхрүм итә алмай. Ерҙе һатыу РФ закондарын боҙоп башҡарылған. Бурысығыҙ тураһында тәүҙә һеҙҙе иҫкәртергә, һөҙөмтә булмаһа, судҡа бирергә тейештәр ине. Бурыслылыҡ факты әлеге хәлгә ярашлы дөйөм йыйылыш ҡарары, устав һәм башҡа документтар арҙамында нигеҙләнергә тейеш. Участкағыҙҙы суд аша кире ҡайтара алаһығыҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы

# ҠАН БАҪЫМЫН...

## балан көйләй



Ата-бабаларыбыҙ яратып, киң ҡулланған баланды киптереп йәки тундырып ҡуйған булһағыҙ, аҙын һеҙгә ауырып китеү ҡурҡыныcы янамай, сөнки балан организмға көс бирә, витаминдар менән тулыландыра. Һалҡын тейгәндә балан төнәтмәһе йәки балан сәйе тән температураһын төшөрә, йүтәл, тамаҡ ауыртыуын бөтөрә. Тауыш ҡарлығып торғанда ла балан ярҙам итә.

Балан сәйе: 3-5 балғалаҡ баланға 3 стакандай ҡайнар һыу ҡойоп, ваҡыты-ваҡыты менән иҙгеләп, емештәрҙе 3-4 сәғәт төнәтергә лә, һөҙөп алырға. Сәйҙе өсҡә бүлеп, көнөнә өс тапҡыр эсергә.

Балан төнәтмәһе: 1 стакан баланға 2 стакан һыу өҫтәп, 20-30 минут ҡайнатырға ла, һыуына төшкәс, 1 стакан бал ҡушып болғатырға. Көнөнә 7-8 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап йүнәлгәнсе эсергә.

Балан сәйе йөрәк ауырыуын да бөтөрә, сиқан сыҡҡанда, экзема булғанда ярҙам итә, үтте ҡыуа, организмдан артыҡ һыуҙы сығара. Баланды бал менән 1:1 нисбәтендә болғап, ошо ҡатнашманы ашағандан һуң көнөнә 4 тапҡыр берәр ҡалаҡ ауыҙға алып, һурып-һурып йотоп ебәрһәң, ҡан баҫымын төшөрә.

Ашҡаҙан, эсәк ауырыуҙары булғанда, баш ауыртҡанда: 20 грамм баланды иҙеп, өҫтөнә 250 грамм ҡайнар һыу һалып, 4 сәғәт төнәтеп һөҙөгөҙ. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 100 грамм эсергә.

Ашҡаҙанда, эсәктәрҙә ауыртыу булһа: 50 грамм баланды иҙеп, 2 стакан ҡайнаған эсе һыу менән ҡойоп, 40 минут тотҡас һөҙөп, стакандың өстән бер өлөшө күләмендә аш алдынан эсергә.

Тир сығарыу һәм эс йомшартыу өсөн: 1 ҡалаҡ баланды эмаль һауытҡа һалып ҡайнаған бер стакан һыуҙы өҫтәп, ҡапҡас менән ябырға ла, ҙурыраҡ һауытта ҡайнап ултырған һыуҙа 15 минут тоторға. Бүлмә температураһында 45 минут һыуытҡас, һөҙөп, өскә бүлеп, бер көндә эсеп бөтөргә. Был төнәтмәне тәндә ныҡытыу өсөн дә ҡулланалар.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Дин ҡағиҙәләре

● Мосолман ҡәрҙәштәр менән танышыу, ауырлыҡтарға өйрәнеү, сәйәхәт итеп ғибрәт алыу ниәте менән фарыз булған хаж сәфәренә барығыҙ.

● Халыҡтарҙы хаҡ юлға саҡырыр өсөн Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгәндәре барыһы ла Аллаһы Тәғәләнең хаҡ илселәре һәм гонаһтан пак бәндәләр булғандары өсөн бәйғәмбәрҙәрҙең (Аллаһы Тәғәләнең салауаты һәм сәләме уларға булһын) барыһын ысын күңелдән һөйөгөҙ.

● Мөбәрәк динебеҙ - был донъянан әхирәткә алып барасаҡ тура юлыбыҙ. Хәсрәтле ваҡыттарҙа аҫтына инеп һыйынасаҡ еребеҙ. Мәшәҡәттәрҙә рәхәт күрһәтәсәк ярҙамсыбыҙ. Бөтә төрлө ҡурҡыуҙар булғанда өмөт итәсәк урыныбыҙ булған өсөн уға йәбешегеҙ.

● Сауап һәм ғазаптар, файҙа һәм зарарҙар бөтә ғәмәлдәребеҙҙә биреләсәк әжер-сауаптарына элек йәшәгән һәм киләсәк быуындың тәжрибәләренән беҙгә һәр ваҡыт хәбәр биреп торған хаҡ мөршиттәребеҙ, Ҡөрьән шәрифтең хаҡ һәм мөбәрәк китап булыуына ышанығыҙ.

● Донъяның иң ауыр сәғәте булған үлем иҫереклеге хәлендә үлемде еңеләйткән Шәриф-и Ислам динебеҙгә аҙау тешегеҙ менән йәбешеп, һәр һуҙ һәм эшегеҙҙә Аллаһы Тәғәләгә таянығыҙ.

● Әхирәт өлөшөнән мәхрүм ҡалырға теләмәһәгеҙ, изге бәндәләр юлынан йөрөгөҙ, шөбһәле һәм шикле кешеләргә дуҫ булмағыҙ. Был ндай нәмә нәфсегеҙгә ауыр булмаһын тиһәгеҙ, алдығыҙҙа үлем тигән нәмәнең көтөп торғанын онотмағыҙ.

● Халыҡтан йәшереп тотасаҡ әйберҙәрҙе Аллаһы Тәғәләнән һорамағыҙ һәм ул риза булмаясаҡ әйберҙәрҙе халыҡҡа ҡарата ҡулланмағыҙ.

● Мәсет һәм ғибәҙәтханаларға әҙәпле инегеҙ, Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтенә тәүбә һәм тәүфиҡ теләп, доға итегеҙ. Мәсеттең хөрмәтен ебәрәсәк әйберҙәрҙән һаҡланығыҙ.

● Эштәрегеҙҙең хәйерле булыуын Аллаһы Тәғәләнән һорағыҙ. Күңелдәрегеҙ нескә һәм мөбәрәк ваҡыттарҙа дин һәм донъя кәрәктәре, үҙегеҙ, балаларығыҙ, бөтә нәҫелегеҙ, ҡарындаштарығыҙ, остаздарығыҙ һәм һеҙҙән доға ҡылыуҙы һораған кешеләр өсөн иман менән донъянан үтеү өсөн доғала булығыҙ.

● Бөтә хәжәттәрегеҙҙе Аллаһы Тәғәләнең үҙенән тура һорағыҙ, доға ҡылыу өсөн белмәгән телдәрҙә булған доғаларҙы уҡымайынса ихлас күңел менән белгән телдә һорағыҙ. Аллаһы Тәғәлә менән үҙегеҙҙең арала үле һәм тереләр араһынан һис кемде тоташтырыусы итеп ҡуймағыҙ, ниҙер әйтмәгеҙ, фәлән шәйех хөрмәтенә, тип һораузан, зинһар, һаҡланығыҙ. Шулай булыуы ихтимал. Халыҡ "вәли" һәм "тәҡдиргә йогонто яһаусы" тип ҡабул иткән заттар Аллаһы Тәғәлә алдында рәхмәтенән һүрелгән кеше булыуы ихтимал.

● Рәсүл Әкрәм тарафынан хәбәр бирелмәһә, һис кемдең бәхете һәм бәхетһеҙлеге тураһында геүаһлыҡ бирмәгеҙ.

● Үҙегеҙҙең ышаныуығыҙҙы һәм ғәмәлдәрегеҙҙе Рәсүл Әкрәм юлында ҡулланырға тырышығыҙ. Башҡаларға булышмағыҙ, һис кемде лә "яман мәҙһәптә", "иманһыҙ" һәм "кафыр" тип һөйләмәгеҙ, телегеҙҙе бындай әйберҙәргә ғәҙәтләндермәгеҙ.

● Аллаһы Тәғәлә бойорған фарыздарҙы ташламағыҙ. Уларға ҡаршы килгән нәмәләр янында йөрөмәгеҙ, ғалимдарҙы хөрмәт итегеҙ, күңелдәрегеҙҙе һәр ваҡыт тәҙәк йөрөтөгөҙ. Күңелегеҙ тәҙәк булһа, бөтә тәнегеҙ ҙә тәҙәк булыр.

● Ҡөрьән шәриф уҡығанда мәғәнәһен камил итеп белмәһәгеҙ ҙә, Аллаһы Тәғәләнең һүҙҙәре тип, хөрмәтләп һәм ололап тыңлағыҙ, ситкә ҡарамағыҙ, ҡулығыҙ һәм кейемегеҙ менән уйнамағыҙ.

● Ҡартлыҡҡа тиклем булған йәш көндәрегеҙҙе, ауырыуҙан элек булған сәләмәтлегегеҙҙе, фәҡирлектән элек байлығығыҙҙы, эшкә тиклемгә ял сәғәттәрегеҙҙе, вафат иткәнсе тормошоғоҙҙо байлыҡ тип белегеҙ.

*АҒИНӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ*



# ДУҪЫҢДЫ ЕҢЕЛСӘ ЯРАТ,

## йәки Һәр нәмәлә сама бел

### Көҫәү

**Яҡты донъяла йәшәүебеҙ шуныһы менән дә ҡиммәтле: һәр кем юғалтҡандарын ҡайтарыу, күңел төпкөлө көҫәгәнен тормошҡа ашырыу теләге менән яна. Быныӊ өсөн бары көслө ниәт һәм хыялыңдың төҫмөрләнешенән тыш, уның көҙгөләге кеүек сағылышы тәүшарт.**

Күңел көҫәгән нәмәләр бихисап. Мәҫәлән, йорт һалыу, ғаилә ҡороу, һөнәргә эйә булыу, карьераңды үҫтереү. Йәки һаулыҡ мәсьәләһен алайыҡ. Һаулыҡҡа туймағандарҙың ҡайһылары аңлы килеш ихтыяр көсөн туплап, сәләмәт йәшәү рәүешен үҙ итә. Икенселәренең ышанысы - дарыуҙарҙа. Ыңғай һөҙөмтә бар икән, нинә хупламаҫҡа? Ә инде гонаһ йыйылмаһы булған хәмерҙе ауыҙға алыусы бәғзеләр, тәү ҡарамаҡҡа һоҡланып бағырлыҡ батыр-матурҙар, үҙҙәре лә аңғармаҫтан, эскелекте, аҙғынлыҡты көҫәйҙәр.

Матур тормошҡа өлгәшәм тиһәң, үҙеңдәге, көнитмешеңдәге байтаҡ кире күренештәрҙән, ғәҙәттәрҙән, йолаларҙан арынырға кәрәк шул. Мәҫәлән, иҫәпһеҙ-һаныһыҙ мәжлестәрҙең аҙағы хәйерлегә илткәне һирәк күренеш. Әммә мәжлес йыйыу хәҙер бер ни тормай. Әйткәндәй, мосолман элек үҙ ғүмерендә исем, никах, үлем туйҙарын ғына билдәләр булған. "Үлем туйына яһалған бер аҙым - ул тыуған көн үткәреү", - тип аптирәткайны Ислам университетында уҡыусы бер бала. "Һеҙ тултыра торған тоҡтарҙың иң яманы - ашҡаҙан", - тигән Мостафа ғ.с.м. Нәфсеңә баш булырға кәрәклеген аңғарта түгелме был? Харамдан тыйылғанға 900 дәрәжә сауап яҙылырын барыбыҙ ҙа беләбеҙ.

Көҫәү кешенең аңынан тыш та тыуыуы мөмкин, әлбиттә. Юҡҡа сығасаҡмын, йә алкоголикҡа әйләнәсәкмен, тигән маҡсатты ҡуйғандар юҡтыр ҙа үҙ алдына. Әммә кеше ҡайһы саҡта үҙ-үҙен тотошо, йәшәр өсөн ниндәй һуҡмаҡты һайлауы менән һәләкәтен яҡынайтыуын һиҙмәй ҙә ҡала. Һәр заралы ғәҙәттең эҙемтәһе кире була. Мәҫәлән, хеҙмәт һөйһөнмәйһең икән - юҡсыллыҡта йәшәйһең, яҡындарыңдың йәнен игәйһең икән - улар ҙы үҙеңдән биҙҙерәһең. "Бындай әҙәм өйҙән-өйгә йөрөй ҙә ята, йорт-ерһеҙлеге көҫәй", - тигәндәрен ишеткән бар - был да кемгәләр ишара булыуы бар.

Шулай булғас, насар ғәҙәттәребеҙҙән арынып, ҡараңғылыҡтан ҡотолайыҡ, күркәм холоҡтарыбыҙ ярҙамында яҡтылыҡ ҡына көҫәйек.

### Өлөшкә тейерҙе хәстәрләү

Миненсә, барыһы ла донъяла өлөшкә өмөт итә ала. Мөҙҙәтең етеп, бәхетле сәғәттең еткәнен күптәр һиҙемләй ҙә. "Ҡыҙыл йомортҡа көнөндә ҡиммәт". Ашығыу - шайтандан, сабырлыҡ - Хоҙайҙан, тип юҡҡа тызыҡтанымы ни беҙгә агинәйҙәр. Кире осраҡта, икмәккә алда үрелгәндең башына шаҡ итеп ҡалаҡ башы эләккән бала хәлендә иҫәңгерәүең бар. Унан һуң, өлөшөңдө кәметеп ҡуйһаң, уның ғүмер аҙағынаса етеүе лә икеле. Шулай булғас, иҫ белә-белгәндән мейеңә һеңдерелгән һабаҡтарға буйһонмайынса бүтән сара юҡ. Алтын бөртөгөләй ҡәҙерләп, хәтер һандығында һаҡланған аҫылдар һаман маяҡ.

- Хоҙай сәбәпһеҙ бирмәй. Үҙеңдең бәхетеңде үҙең хәстәрләүҙән оялырға кәрәкмәй. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда әҙәп һаҡлаған ҡатын-ҡыҙҙарҙы күрәһең: япа-яңғыҙҙар ҡартайған көндәрендә. Тәүәккәлерәктәре ул-килен ҡәҙерен күреп ултыра.

Әсе дөрөҫлөктө ишеткәндә, 12-13 йәш тирәһе булғандыр минә. 15 йәшемдә ҡаты сирҙән әсәй гүргә күсте. Үлерен һиҙенепме, әллә бер итәк туғандарымды ҡарауҙы үҙ иңенә алыр ҙа, ҡыҙым бәхетенә ҡул һелтәп ҡуймаһын, тигәнме, унынһын кем белә. Етемһерәп ҡалған күңелемде иретеп, еңгәләремдең тыйыуҙары йөрәккә һары майҙай ягыла.

- Кейәү булаһы егет тәүҙә һине атай, ағайыңдан һоратһын. Никах уҡылғас ҡына берегегеҙ. Ҡәҙерегеҙ артыр ике яҡта ла, - ти Әнүзә еңгә.

- Мин сараһыҙҙан кеше бабайына сыҡтым. Ҡыҙ баланың теләге ҡабул була. Йәмәғәт бәхете бирһен Хоҙай һинә, - Ғәншар еңгәм шулай алғышлай.

- Белемле, һөнәрле элек-электән ҡәҙерле һаналған. Иҙән йыуып булһа ла, уҡып сығырға тырыш, - хәл өҫтөндә саҡ ултырған Тәслимә әбейемдән алтын һүҙҙәре.

- Ике ҡыҙым да педучилищела уҡыйҙар. Һинең дә уҡырға булған теләгең барлығын белә-күрә йөрөйбөҙ. Балалар менән эшләүгә лә һиның-һыйпатың килешеп тора, - тип Хафиза еңгә хыял ҡанаттарымды күтәрмәләй.

Белем эстәү маҡсатында Сибай ҡалаһына юлландым. Студент булыу бәхетенә лә ирештем. Шулай йыл артынан йыл үтте. Ҡала мәктәптәренең береһендә һынау дәрестәрен бирергә әҙерлек башланған саҡ. Конспектты раҫлатырға тип, методист йәшәгән йорт ишеген шаҡыным. Кәнәш-тәнәш итеп ултырғанда, уҡытыусымдың ире эштән ҡайтып инде. Ирле-ҡатынлы һоҡланғыс иштең үҙ-ара сәләмләшеүҙәре, мөғәмәләһе күңелемә ятты. "Йә, Хоҙай, ишемде табырға ярҙам ит". Йәшен тиҙлегендәй ошо уй мейемде ярып үтте.

Амин, тип торғандарҙыр фәрештәләр. Шөкөр ҡыламын. Нәҡ ике йылдан, нәҡ шул ағай кеүек йыуантаҡ кәүҙәле, кҙлекле егетте осраттым. Дуҫлашып та китеп, оҙаҡ та үтмәй, ғаилә ҡорҙоҡ. Ҡапма-ҡаршы холоҡлобоҙ. Әммә беребеҙҙе икенсебеҙ тулыландырып йәшәйбеҙ, сөнки берләштергән уртаҡ һыҙаттарыбыҙ байтаҡ. Өс малайға ғүмер бирҙек, әле килеп, ейәндәребеҙгә һөйөнөп туймайбыҙ.

Буласаҡ ҡәйнәмдең образын Әбйәлил районы Ишҡол ауылында йәшәгән мөләйем йөҙлө ҡатын һынландырҙы. Тормошта уныутуңыу ихтималлығын, күрәһең, ярайһы төшөндөргәндәр. Хафиза еңгәмдең, урыны менән тел-теш кәрәк, тик үҙ хәлеңде самалап, тигәнен тотор инемме! **Рәхмәт яуһын инде тормош һабаҡтары мәктәбе булған апайҙар, еңгәйҙәремә. Яҙмыш ептәре осонан сыуалыуынан ҡайһылайыраҡ аралағандар. Төшөп ҡалғандар рәтендә йөрөмәгәнмендер, ахыры. Ҡолағыма туҡыусының суҡыусыһы тура килеүен әйт әле.**

### Сама белеү кәрәк

Һәр нәмәлә алтын урталыҡты һаҡла. Үҙ йөҙөңдө юғалтма... Дуҫыңды еңелсә ярат... Тыйыуҙарҙа ла һығылмалылыҡҡа өндәй әлеге хәҙис. Сетерекле мәлдәр тыуып, уны кисекмәҫтән ыңғай яҡҡа хәл итеү талап итәлә. Ә тәжрибәһе юҡтың - аҡылы юҡ.

Һеңлем дә башҡа ҡыҙҙар менән йылы яҡтарға сығып китте. Маҡсаттары ла изге. Туҡыусылыҡ фабрикаһына эшкә урынлашыу, өҫбашты бөтәйтеү. Сит мөхитте ерһенмәй, әхирәттәренең берәүҙәре ҡайтып килде, икенселәренә атаәсәләре барҙы. Ағайым менән беҙ ҙә барғайныҡ, тик һунланыҡ. Унан һуң, ауыҙлыҡланған көйө сапҡан аттың дилбегәһен бушатып ҡара. Ажарланған хәлдә, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй барып төртөлгәнсе саба, уның әйләнәтирәгә, үҙенә зыяны теймәүенә гарантия ҡайҙа? Тура юлға сыға алмай, лабиринттарҙа аҙашты ул. Кескәй сағынан йыр-моңға ҡыҙыҡты. Төнәрәк уртаһына баҫыр ҙа һинд-үзбәк йырҙарын һуҙыр ине. Барыһын да ауыҙына ҡаратып, гел тамаша көҫәне һәм күңеле теләгәнен Ашхабад ҡалаһында тапты. Бер үк шарттарҙа тәрбиәләндек, ризыҡ ейҙек, Мазар һыуын эсеп үҫтек, ә шулай ҙа ҡарындашымдың мәңгелеккә үҙен юғалтыуы барыбыҙҙы ла тетрәндерҙе. Хушлашыу хатын минә төбәп яҙған булған... Апай, нинә мине бында ебәрҙегеҙ... Хәйер, тәҡдиренә яҙылғандан һаҡланып ҡына ҡотолоп булһа икән.

**Эй, әҙәм балаһы! Үҙеңә етәрлеге әҙерләнгән булһа ла сигенән сығырлығын эҙләйһең шул.**

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы**
**Сораман ауылы.**

ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ

# ИБРАҺИМ ИСХАҠОВ





**Ибраһим Ейәнбай улы Исхаҡов - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. 1891 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ районы) Мырҙаш ауылында тыуған. 1913 йылда батша армияһына хеҙмәткә алынып (хәрби мәктәп тамамлаған, күрәһең), офицер дәрәжәһендә ҡайтып төшә.**

1918 йылдың йәйендә Башҡорт армияһына хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Штабс-ротмистр И. Исхаҡов Зәки Вәлидиҙең шәхси адъютанты һәм тән һаҡсыһы булып хеҙмәт итә. 1918 йылдың көҙөндә Вәлиди уны Айырым Башҡорт корпусының 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп тәғәйенләй. Декабрь айына тиклем Исхаҡов үҙенең полкы менән Аҡтүбә фронтында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша.

1918 йылдың 14 декабрендә Вәлиди Ибраһим Исхаҡов менән Нуриәғзәм Таһировҡа (2-се полктың муллаһы) йәшерен хат ебәрә. Унда фронтҡа һибелгән башҡорт полктарын Башҡортостан территорияһында, бер урынға тупларға, тигән йәшерен фарман бирә. Исхаҡовҡа ошо фарманды башҡорт ғәскәрҙәренә таратырға ҡуша. Декабрь аҙағына башҡорт полктары бер урынға йыйыла башлай. Ибраһим Исхаҡов та үҙенең полкын Аҡтүбә фронтынан Башҡортостанға алып килә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре 1919 йылдың февралендә Совет власы яғына сыға. Ә май аҙағында Саранскиҙа Башҡорт корпусы частарынан, ике уҡсы һәм ике кавалерия полктарынан торған Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола башлай. Ибраһим Исхаҡов бригаданың 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп ҡуйыла.

1919 йылдың июнь башында Реввоенсовет рәйесе Троцкий Саранскиҙағы Башҡорт бригадаһын Деникинға ҡаршы Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ебәрә. Бында башҡорт полктары Деникиндың армияһына ҡаршы ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша. Харьков янында айырыуса ҡаты һуғыштар булып үтә. Ҡыҙылдарҙың 14-се армияһы частары тулыһынса тарҡалып, тәртипһеҙ рәүештә фронттан сигенгән шарттарҙа Башҡорт бригадаһына яу яланында бик ауырға тура килә. Күп осраҡта күрше ҡыҙыл частар менән бәйләнеш булмауы, уларҙың сигенеүе арҡаһында башҡорт полктарына аҡтар ҡамауында ҡалырға тура килә. Ошондай ҡамауҙарға юлығып, Ибраһим Исхаҡовтың 2-се полкы айырыуса ҙур юғалтыуҙар кисерә. Полктың яртыһы тиерлек яу яланында ятып ҡала.

1919 йылдың июль башында Башҡортостандан өҫтәмә ғәскәрҙәр килеү менән бригада Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Зәки Вәлиди Көньяҡ фронтҡа килеп, башҡорт ғәскәрҙәренең хәле менән таныша. "4 июля я смотрел в эшелонах уже 2-й стрелковый Башкирский полк, который несмотря на то, что терпел на фронте больше всех, сохраняет все достоинства башкирского войска, в этом полку я не заметил ничего, кроме хорошего, за что приношу благодарность всем красноармейцам полка, командиру полка Исхакову и политкому Юлдашеву", - ти хәрби комиссар. Әммә артабанғы ауыр һуғыштар барышында дивизия тағы байтаҡ юғалтыуҙар кисерә. Ошоноң һөҙөмтәһендә 14-се армия етәкселәре дивизия ғәскәрҙәрен ике йыйылма полкка, Йыйылма Башҡорт уҡсы һәм кавалерия полктарына туплай. Исхаҡов етәкселек иткән 2-се полктың иҫән ҡалған яугирҙарын батальонға туплап, йыйылма полкка ҡушалар, ә Исхаҡов батальон командиры итеп ҡалдырыла.

Артабан ул Зәки Вәлидиҙең адъютанты булып йөрөй. 1919 йылдың көҙөндә Ибраһим Исхаҡов Петроград ҡалаһындағы Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының 2-се полкына командир итеп тәғәйенләнә. Юденич ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Яуҙа ҡаты яралана. Петроградты һаҡлауҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ҡаһарман сардар РСФСР-ҙың юғары наградаһы - Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Ибраһим Исхаҡов 1920 йылдың февралендә республикаға ҡайта. Март айында Үҫәргән кантонындағы коммунистар Башревкомға ҡаршы фетнә ҡора. Съезд үткәреп, кантондағы власты үҙ ҡулына ала, Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһай. Исхаҡов Башревком комиссияһы составында (Х. Әмиров, С. Ишмырҙиндар менән бергә) Үҫәргән кантонында килеп сыҡҡан хәлде тикшереүҙә ҡатнаша. Комиссия ағзалары, һалдаттар менән барып, тиҙ арала тәртип урынлаштыра. Ғәйеплеләрҙе ҡулға алып, кантонда Башҡортостан автономияһы власын тергеҙә. Фетнәнең башында торған кантондың коммунистар ойошмаһы ҡыуып таратыла. Март аҙағынан Исхаҡов Үҫәргән кантонының хәрби комиссары булып хеҙмәт итә.

1920 йылдың майында ул Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссары урынбаҫары Әүхәҙей Ишмырҙиндың ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Әммә оҙаҡламай, 1920 йылдың 19 майында, Үҙәк Совет власы үҙенең декреты менән Башҡортостандың автономияһын сикләй. Зәки Вәлиди көрәште Төркөстанда дауам итергә ҡарар итә. "Мин Мәскәүҙән киткәс, ышаныслы офицерҙарымдың өсөһөнә Төркөстан хәрәкәтенә ҡушылыу планымды астым. Шуларҙан адъютантым Ибраһим Исхаҡовҡа Масальскийҙың "Төркөстан өлкәһе" исемле әҫәрен биреп, уны ентекле өйрәнергә ҡушҡас, ул "Ниңә?" тип һораны. "Бәлки, бер аҙҙан шунда китербеҙ", тигәс, "Өйрәнермен", тип яуап бирҙе", - тип яҙа Вәлиди.

1920 йылдың июнендә Зәки Вәлидиҙең көрәштәштәре - Башревком ағзалары, офицерҙар уның планына ярашлы Төркөстанға китә. "Беҙҙең Башҡортостан ғәскәренән Әүхәҙей Ишмырҙин, ярҙамсым Ибраһим Исхаҡов, башҡа бер нисә офицерыбыҙ, полковник Һибәтулла Һөйөндөковтың яҡын офицерҙары менән бергә килеп, барыһы ла Бохараның хәрби ойошмаларында етәксе вазифалар алды", - тип яҙа Вәлиди. Артабан Ибраһим Исхаҡов Кермана ҡалаһында хәрби мәктәп ойоштороп, курсанттарҙы уҡытыу менән мәшғүл була. Баҫмасылар яғында ҡыҙылдарға ҡаршы алыштарҙа ҡатнаша. 1921 йылдың апрелендә Ибраһим Исхаҡов Бохара әмире яҡлы булған баҫмасылар тарафынан үлтерелә. "Беҙҙең йәмғиәт (Төркөстан милли берлеге - А.Я.) исеменән бирелгән бойороҡто үтәп, Бохара хәрби мәктәбе уҡыусыларынан 40 офицерыбыҙ, Ибраһим Исхаҡ менән бергә баҫмасыларға ҡушылыу өсөн Нурата яғына китеп барышлай, Ҡаһһар мулла етәкселегендәге әмир яҡлыларҙың һөжүменә дусар булды. Бер өлөшө, шул иҫәптән 3 башҡорт, үлтерелеп, икенсе өлөшө әсир ителде..." - тип яҙа Вәлиди.

Ғәзиз халҡының бәхетле киләсәге өсөн күпме ауырлыҡтар кисергән, күпме утты-һыуҙы кискән ҡаһарман сардарҙың ярһыу йөрәге алыҫ Төркөстан далаһында тибеүҙән туҡтай.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

АТА-БАБА АҠЫЛЫ




# ЙӘМҒИӘТ ТӘРТИПТӘРЕ

**Күренекле шәхесебеҙ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың был яҙмаларындағы фекерҙәр, өгөт-кәңәш, тәкдимдәр, әйтерһең дә, бөгөнгө көнгә төбәлгән. Хәйер, тыуған еребеҙ, тыуған төйәгебеҙ яҙмышы өсөн яуаплылыҡ беҙҙең милләт иңенән төшкәне юҡ. Шуға ла һәр аҙымыбыҙҙа, һәр көнөбөҙҙә аҡһаҡалдарыбыҙ, шәхестәребеҙ аҡылын тотайыҡ. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың ошо яҙмаларын да ҡабаттан уҡып сығайыҡ әле.**

Башҡорттар хаҡында ниндәйҙер бер нарыҡ фекер әйтерҙән алда, улар араһында күптән баш алған һәм бөгөнгө көндә лә йәшәп килгән ҡайһы бер эске тәртиптәрҙе күрһәтеп китергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Бөтә күп һәм аҙ ерле вотчинниктар йәмғиәттәрендә, шул иҫәптән үҙем йәшәгән һәм күп кенә ауырлыҡтарҙы кисергән йәмғиәттә лә, тормош тәртиптәре, саҡ ҡына айырмалыҡтары менән, түбәндәгесә:

● Ер биләү, уны һәм йылға-күлдәрҙе арендаға биреү, сит кешеләрҙең йылҡыларын тибенгә, һыйырҙарын, хатта ҡаҙҙарын көтөүгә индереү эше көслө һәм ҡороҡкос төркөм ҡулында. Уның башында һәр саҡ староста йәки старшина тора. Хөкөм-ҡарарҙар шундай төркөмдөң ҡыҫымы аҫтында төҙөлә лә инде.

● Быңдай йоғонтоло төркөмдө нигеҙҙә урындағы власть башлыҡтары һәм ауылдың байҙарынан торған кешеләр тәшкил итә... Улар нимә эшләһәләр ҙә түрәләр алдында аҡлана беләләр.

● Башҡортостан тураһындағы 1863 йылғы Положение буйынса юғары начальниктарға теге йәки был ер биләмәләрен һатыуҙың файҙалы булыу-булмауын билдәләүҙә ҡыҫылырға рөхсәт ителмәй. Теге йоғонтоло төркөмдәргә шул ғына кәрәк ине. Улар һатыла торған ерҙең һәр дисәтинәһенә, әйтәйек, 5 һум хаҡ ҡуялар, ә приговорҙа быныың 1 йәки 2 һумы ғына күрһәтелеп, ҡалғанын, юғары түрәләрҙең ҡыҫылмауҙарынан файҙаланып, кеҫәлек һылтауы менән үҙҙәре нисек теләһә, шулай, йә аҡсалата, йә тауарлата бүлешәләр. Был "тәртип", ерҙе арендаға биргәндә, әле булһа "тантана" итеп йәшәп килә.

● Атһыҙҙар йәки эшсе-зимагорҙар тип йөрөтөлгән, шулай уҡ бойондороҡло хәлдә булған крәҫтиәндәрҙең ихтыярҙарынан тыш, аҙ ерле кешеләр еренең өҫтән бер өлөшө тип әйтерлек көтөүлек аҫтында ҡала. Унда, бер ниндәй килешеүһеҙниһеҙ һәм халыҡтан бер ниндәй ҙә ризалыҡ булмай тороп, йәй буйына байҙарҙың, старосталарҙың, ҡазый-судьяларҙың һәм башҡа шулар ишеләрҙең малдары йөрөй. Шулай итеп, кешеләрҙең мал аяғы аҫтында иҙелгән иң үңдырышлы бик күп бесәнлектәре һәм һөрөнтө ерҙәре әрәм була. Был тәртипкә ҡаршы сығыусыларҙың, тупаҫлыҡта ғәйепләнеп, язаға тарттырылыуы мөмкин.

● Шуның өҫтәүенә, улар үҙҙәренең малдарын, приговорҙа күрһәтелмәүенә ҡарамаҫтан, көҙ көнө йыш ҡына ужымға ебәрәләр. Шуның арҡаһында вотчинниктар башҡа крәҫтиәндәр йыйып алған игендең яртыһын ғына алалар. Йәмғиәткә, уның тәртиптәренә вотчинниктар ҡаршы сыҡмай, сөнки был урындағы власть башлыҡтарына ҡаршы килеү булыр ине. Хатта ипләп кенә һорағанда ла, улар: "Беҙ түрәләребеҙҙән ҡәнәғәтбеҙ", - тип яуап бирәләр. Мәҫәлән, И. ауылынан булған старшина У. ауылының малдарын приговорһыҙ-ниһеҙ иген сәселгән баҫыуға ебәртте, һуңынан бөтә ауыл халҡын үҙенең ер биләмәһен һөрөүгә ылыҡтырҙы. Ә малдар игенде һәм сабынлыҡты тапай бирҙеләр, көҙөн кәбәндәрҙе ашап, ауҙарғылап бөттөләр. Ярлылар был хәлде, тештәрен ҡыҫып, күҙәтеүҙән ары китә алманы. Кемгә лә булһа зарланыу, шикәйәт йөрөтөү мөмкин түгел һәм был файҙаһыҙ ҙа. Сөнки был старшина үҙенең насар эшенән тыйылһа, уның урынына икенсе бер старшина, судья йә иһә кулак килә...

**(Дауамы бар).**

*✓ Уҡыусыларымды минең йөрәк хистәрем, аҡылым, тәжрибәм, белем кимәлем "Ah" иттерә алмаһа, ул ваҡытта мин ниндәйҙер юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелә лә алмайым.*



**Туған тел уҡытыусыһы башҡа уҡытыусыларға оҡшамаған кеүек. Ул һәр саҡ матурыраҡ та, уның йөҙө лә нурлыраҡ, йөрәге лә ҙурыраҡ төҫлө, башҡаларға ҡарағанда матурыраҡ кейенә, ул хис-тойғо өлгөһө лә, ҡыҫҡаһы, ул - илаһи. Бының ысынлап та шулай икәнлегенә бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ, туған тел уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй конкурсында тиңдәр араһында тиң булып, абруйлы урындар яулап, үҙҙәрен генә түгел, Башҡортостаныбыҙҙы ла данлаусы Салауат районы Лағыр мәктәбе уҡытыусыһы Венера Мәхәсим ҡыҙы СИТДИҠОВА һәм баш ҡаланың 141-се мәктәбе уҡытыусыһы Гөлназ Әнүәр ҡыҙы МӨХӘМӘТЙӘНОВАға ҡарап та әйтеп була.**
**Улар менән уҡытыусы шәхесе, уның йәмғиәттә тотҡан урыны, уҡытыусыға хас булған сифаттар тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**► Башҡортостанда быйыл Республика йылы, III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү, Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын байрам итеү йылы. Шулай ҙа бөгөн кемдән генә: "2010 йыл ниндәй йыл әле?" - тип һораһаң, күптәр: "Уҡытыусы йылы", - тип яуап бирәсәк. Бөгөнгө уҡытыусының йәмғиәттә тотҡан урыны тураһында нимә әйтер инегеҙ?**

сы бара. Тәрбиәүи мәсьәләләр буйынса вожатыйҙар, хәрби етәкселәр юҡ, балалар һаны етмәй, тип, социаль педагогтарҙы алдылар, психологтарыбыҙ юҡ. Ошо киләсәктә үҙенең эҙемтәләрен белдерәсәк, тик һуң буласаҡ. Мәктәп үҙе бер система, әммә уҡытыусы бер үҙе генә бөтәһен дә хәл итә алмай.

**► Заман башҡа - заң башҡа тиҙәр. Был әйтем генә түгел,**

күҙ уңынан ысҡындырһаң, иртәгә уға бәйле проблема килеп баҫыуы ихтимал. Беҙҙең заманда иҫ китеп сит телдәр өйрәнеү булманы, юғары уҡыу йортонда ла уны баһа өсөн генә уҡыныҡ. Сит тел өйрәнеү кәрәклеген дә тоймағанбыҙ, уны камилыраҡ итеп өйрәнеү өсөн маҡсат та булмағандыр инде. Күпмелер эшләгәндән һуң аспирантураға уҡырға инеү ла өйрәнергә, хатта шул балалар менән ошо стилдә йырҙар ижад итергә лә, ансамблдәр төҙөргә лә тура килде. Йәғни был эш минең күңелемә ятып бөтмәһә лә, мин уны ишеткәнем юҡ, белмәйем, ул миңә оҡшамай, тип кенә тора алмайым. Бөгөнгө көндә лә өлкән синыф егеттәре, Венера апай, беҙҙең йырҙарҙы әҙерәк ҡарап китегеҙ инде, тип йыш мөрәжәғәт итә. Мин уларға: "Беҙ ҡалай матур заманда йәшәгәнбеҙ, ә һеҙ үҙегеҙҙең йырҙарығыҙҙа гел тиргәшәһегеҙ: һин ҡайтып кит, мин дә ҡайтып китәм, юҡ, мин бармайым, мин сыҡмайым, тип йырлайһығыҙ", - тип үҙ мөнәсәбәтемде белдерһәм дә, уларҙы ҡыҙыҡһындырған нәмәләрҙән, уҡытыусы булараҡ, артта ҡала алмайым. Әлбиттә, бер нәмәгә лә фанаттарса бирелергә ярамай, кәйнегеҙ ҙә инде, ниндәй әҫәр ине ул?" - тип һораһалар, "Ул китапханала бар", - тип, китаптың ҡайҙа торғанын, ҡалынлығын, тышын әйтәм.

Уҡытыусының йөрәге ихлас булмаһа, тышҡы яҡтан йылмайып йөрөп кенә баланың күңеленә үтеп инеп булмай. Йөрәк, ысынлап та, Рәшит Назаровса, мөхәббәтле лә, йәшенле лә, ихлас та булһын. Уҡыусыларымдың оҡшамаған яҡтары килеп сыҡҡанда ғәжәпләнгәнемдә, улар өсөн көйгәнемдә, хатта асыуланғанымды ла белдерергә тейеш ул йөрәк. Уҡытыусы, бигерәк тә ауыл уҡытыусыһы ҡалыпта ғына йөрөй алмай.

**ГӨЛНАЗ:** Уҡытыусы - ул баланың икенсе әсәһе. Уҡытыусы тик белем биреп кенә йөрөһә, ул ысын әсәй була алмай, уҡытыусы ғына булып ҡала. Был

# ҺҮҘЕМ БАЛА ЙӨРӘГЕНӘ

## йөҙөм ихлас, сырайым

**ГӨЛНАЗ:** Замана үҙгәргән һайын, бигерәк тә баҙар мөнәсәбәте мәлендә йәшәгәндә, уҡытыусы ла үҙгәрергә тейеш. Бөгөн уҡытыусының төп бурысы - донъяуи фекер йөрөткән, конкурентлыҡҡа һәләтле балалар тәрбиәләү. Ата-әсәләр тәрбиә эшен уҡытыусылар иңенә һалып ҡуйһа ла, тәрбиә ғаиләлә башлана. Йәғни, бала тәрбиәләгәндә тәүҙә ғаилә, унан мәктәп, унан йәмғиәт ҡатнаша. Уҡытыусы-ғаилә-йәмғиәт күренмәҫ ептәр менән бәйләнгән өсмөйөш ул. Әгәр ҙә өсмөйөштөң бер генә мөйөшө насар, сибек булһа, тарҡаулыҡҡа килтерәсәк һәм беҙ үҙ маҡсатыбыҙға өлгәшә алмаясаҡбыҙ. Берәү генә лә үҙ бурысын үтәп еткермәһә, был ептәр өҙөләсәк, ә кеше менән йәмғиәт араһында еп өҙөлһә, нимә була һуң? Кеше маңҡортҡа, хатта илен, ата-әсәһен һатырға һәләтле буш ҡыуыҡҡа, дала ҡамғағына әйләнә. Мин хатта уҡытыусыны, йәмғиәтте тотороҡло итеүсе кеше, тип атар инем.

**ВЕНЕРА:** Заманында башҡорт халҡында тәрбиәләүсе ролен аҡһаҡалдар, сәсәндәр, мәғрифәтселәр башҡарған. Ауылдағы уҡытыусы бөгөн ошо ролде башҡара. Ул мәғрифәтсе лә, кәңәшсе лә, йәшенә ҡарамайынса, абруйлы аҡһаҡал да булырға тейештер, тип уйлайым. Заман бөтә яҡлап алға бара, әммә уҡытыусы үҙ заманынан бер аҙым алдараҡ барырға тейештер. Шулай булмаһа, күҙемә ҡарап ултырған уҡыусыларымды мин нисек итеп ҡыҙыҡһындырайым да, балаларын мәктәпкә ебәргән ата-әсәләр менән нисек артабан эшләү юлдарын табайым?

Гөлназ әйткән өсмөйөш тураһында ла әйтеп китәйем әле. Әгәр ҙә был өсмөйөштөң береһе аҡһай икән, был ҡасандыр булһа ла йәмғиәттә үҙенең сағылышын табасаҡ. Бер генә миҫал килтерәм: бөгөнгө көндә ҡулайлаштырыу, бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һыйҙырыу проце-

**халыҡ тарафынан әйтелгән тормош ҡануны һәм ул беҙҙең тормошобоҙҙоң бөтә өлкәләренә лә ҡағыла. Һәр бер заман кешегә үҙенең талаптарын ҡуя. Бөгөн һеҙгә - уҡытыусыларға ниндәй талап ҡуйыла, бөгөнгө заман уҡытыусыһының заңы нимәлә?**

**ВЕНЕРА:** Һуңғы осорҙа "башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләйбеҙ" тип әйтеү модаға инеп китте. Был - иң еңел һүҙҙәр, ләкин шунан



мәсьәләһе килеп тыуҙы. Ә унда тәүге имтихан - сит телдән. Ваҡытында сит телде яҡшылап өйрәнгән булһам, бөгөн был проблема тыумаҫ ине бит.

**ГӨЛНАЗ:** Уҡыусылар бөгөн беҙҙән күберәк белә. Шуға ла уҡытыусы уға бөтә яҡлап үрнәк булыр өсөн белемен камиллаштырыу өҫтөндә лә эшләргә, дөрөҫ итеп һөйләшергә лә, матур итеп кейенә белергә лә тейеш. Чеховтың: "Кешелә бөтә нәмә лә матур булырға тейеш: йөҙө лә, кейеме лә, күңеле лә, уйҙары ла", - тигән әйтеме бөгөнгө уҡытыусыға тап килә. Шәхесте тик шәхес кенә тәрбиәләй ала, быға тиклем дөрөҫ һәм камил тип иҫәпләнгән уҡытыусы образына заман үҙе ниндәйҙер төҙәтеүҙәр индерә икән, тимәк, һин замандың заңын аңлап, уға ярашлы үҙгәрә белергә лә тейешһең. Шулай ҙа һуҡ-

шул уҡ компьютерға ла. Әммә синыфтағы малайҙарым мөкиббән китеп компьютер өйрәнгәндә, интернетҡа кергәндә мин ситтә ҡала алманым. Уҡытыусы булараҡ, был эшкә лә уларҙан ярты сәғәткә булһа ла алдараҡ өлгөрөргә тейеш инем, "Эйе, мин быны беләм", - тип әйтер өсөн.

**► Әлбиттә, уҡытыусының аңы, белеме һәр заманда ла юғары баһаланған, был әле лә шулай ҡала килә. Ләкин уҡытыусының йөрәге лә ҙур булырға тейештер ул. Уҡытыусы эшен йөрәге аша үткәрә, тибеҙ, тимәк, уҡытыусы аң менән генә түгел, йөрәк менән дә эшләй…**

йөрәк уҡытыусы йөрәге генә түгел, ә уҡытыусы-әсә йөрәге тип әйтер инем мин. Уҡыусың кәңәш тә һорай, серҙәре менән бүлешә икән, тимәк, ул һиндә әсәһен күрә. Балаға тормошта үҙ юлын табыуҙа, дөрөҫ йүнәлеш биреүҙә уҡытыусы ла ҙур роль уйнай. Рәсәйҙә иғлан ителгән Уҡытыусы йылында уҡытыусы кодексын ҡабул итеү тураһында һүҙҙәр йөрөй. Ә ниңә, табиптар биргән ант кеүек, уҡытыусы кодексы ла индерелһә, мәктәптәрҙә тик ысын уҡытыусылар ғына ҡалыр ине, мин быға ҡуш ҡуллап ризамын. Әлбиттә, кодекс тышҡы, формаль фактор булһа ла, уның нормалары, ҡағиҙәләре уҡытыусының йөрәгенә үтеп инер һәм күпмелер кимәлдә яуаплылыҡ өҫтәр ине. Йөрәгең ябыҡ булһа, һиңә мәктәпкә лә ишек ябыҡ.

**ВЕНЕРА:** Баҡтиһәң, балалар табиптарына, баланы ҡулыңа тотор алдынан ҡулың йылы булырға тейеш, тип өйрәтәләр икән. Уҡытыусы булараҡ, шуны әйтәм: педиатрҙың ҡулдары йылы булырға тейеш булһа, уҡытыусының йөрәге, күңеле йылы булырға тейеш, шунһыҙ мәктәптә эшләү мөмкин түгел.

***Уҡытыусы-ғаилә-йәмғиәт күренмәҫ ептәр менән бәйләнгән өсмөйөш ул. Әгәр ҙә өсмөйөштөң бер генә мөйөшө насар, сибек булһа, тарҡаулыҡҡа килтерәсәк һәм беҙ үҙ маҡсатыбыҙға өлгәшә алмаясаҡбыҙ. Берәү генә лә үҙ бурысын үтәп еткермәһә, был ептәр өҙөләсәк, ә кеше менән йәмғиәт араһында еп өҙөлһә, нимә була һуң? Кеше маңҡортҡа, хатта илен, ата-әсәһен һатырға һәләтле буш ҡыуыҡҡа, дала ҡамғағына әйләнә.***

да алда бала уҡытыусының үҙен яратырға тейеш. Уҡыусы мине яратмай икән йәки мин уҡыусыларымдың талаптарына яуап бирмәйем икән, улар бер ҡасан да башҡорт телен уҡымаясаҡ. Бала иң беренсе дәресте түгел, уҡытыусыны баһалай. Бер яҡтан, уҡытыусының белем кимәле юғары, сифатлы булырға тейеш булһа, уның балаларҙы йәлеп итеүе, үҙенең шәхесе аша предметҡа юл аса алыуы - икенсе мотлаҡ шарт. Йәғни уҡыусының фәнгә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы уҡытыусының йөрәге аша үтә. Замандың заңы башҡа булһа ла, тап ошо заман йәш кешеһенә белем алырға, бөтә мөмкинлектәрҙе табып ҡулланырға, файҙаланырға өйрәтергә тейеш уҡытыусы. Әгәр ҙә бөгөн нимәнелер

ырҙарса заман артынан эйәреү ҙә дөрөҫ түгелдер ул. Мәҫәлән, бөгөн дәрестә техник саралар киң ҡулланыла, әлбиттә, компьютер эште күпкә еңелләштерә, әммә ул уҡытыусыны алыштыра алмай. Халыҡ педагогикаһына таянмайынса дәрес биреү ҙә мөмкин түгел бөгөн.

**ВЕНЕРА:** Минең өлкән улым һигеҙенсе-туғыҙынсы синыфтарҙа уҡығанда бөтөнләй беҙгә таныш булмаған, икенсе йүнәлештәге музыка модаға килеп инде. Балаларға ул оҡшай, бер-береһенән был йырҙарҙы яҙҙыртып тыңлайҙар. Әгәр ҙә улым, уның йәшендәге уҡыусыларым менән уртаҡ тел тапҡым килһә, мин был стилдәге йырҙарҙы белмәй ҡала алмайым. Шулай итеп, рэпты

**ВЕНЕРА:** Уҡытыусының йөрәге бәләкәй һәм таш була алмай. Мәктәптә 178 бала уҡыһа, уларҙың барыһы ла ошо йөрәккә һыйырға тейеш. Мин уҡыусыларым алдында дәрестә лә, былай ваҡытта ла улар һымаҡ була алам: уйнай ҙа, йырлай ҙа алам. Ләкин мин уларҙы ғәжәпләндерә лә белергә тейешмен. Уҡыусыларымды минең йөрәк хистәрем, аҡылым, тәжрибәм, белем кимәлем "Ah" иттерә алмаһа, ул ваҡытта мин ниндәйҙер юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелә лә алмайым. Һүҙ ыңғайы ғына аптыратырға, ҡыҙыҡһындырырға ла мөмкин бит. Мәҫәлән, "Ана шул әҫәрҙә шулай булған, һеҙ шуны беләһегеҙме?" - тип һорайым да, башҡа ул турала өндәшмәйем. Аҙаҡтан килеп: "Апай, һеҙ әйт-

**► Йыш ҡына табип хатаһы арҡаһында килеп тыуған трагик хәлдәр тураһында ишетеп торабыҙ. Уҡытыусы үҙ һөнәренең оҫтаһы булһа ла, ул да кеше. Уҡытыусының хаталанырға хоҡуғы бармы? Баһа ҡуйғанда объектив булмаһа, тағы ла төрлө вағыраҡ хаталар ебәрһә, ул үҙен нисек торорға тейеш? Ғөмүмән, уҡытыусы бөтә балалар алдында баланан ғәфү үтенә аламы?**

**ВЕНЕРА:** Хаталарҙан бер кем дә азат түгел. Табиптарҙың ғына түгел, бөтә һөнәр эйәләренең эш дәүерендә хаталары була. Әммә уҡытыусы, кешенең йәшенә ҡарамайынса, ғәфү

✓ *Дәреслектәрҙә мәктәптә бер көн уҡытып ҡарамаған ғалимдар яҙа, улар уҡыусыларҙың эске донъяһын аңламай ҙа, белергә лә теләмәй. Дәреслектәрҙә хатта ҡала балалары тормошонан алынған текстар ҙа юҡ.*



үтенә белә икән, был уның баһаһын төшөрмәй һәм уның ғәфү үтенә белеүе һәйбәт сифаттыр, тип уйлайым. Йәғни, ул да кеше булараҡ ғәфү итә лә, ғәфү үтенә лә белергә тейеш. Яңы ғына Рәшит Ниғмәтиҙең "Һаҡмар ҡыҙы"н үткәндә уҡыусыларымдан: "Шулай ҙа, йәшәр өсөн киләсәктә үҙегеҙҙә ниндәй өс сифатты тәрбиәләргә тейешһегеҙ?" - тип һорайым. Ниндәй яуапҡа килдек беҙ, тип уйлайһығыҙ? Беренсенән, кеше үҙенең хаталарын таный, икенсенән, ғәфү итә һәм, өсөнсөнән, ғәфү үтенә лә белергә тейеш. Дөрөҫ әйтмәгәнмен йәки баһаны яңылыш ҡуйғанмын икән, ярҙам һүҙенән әйтелгән тәнҡит һүҙен дә бала ауыр ҡабул иткән икән, ғәфү үтенә белергә кәрәктер.

Әҙәбиәт уҡытыусыһы һүҙ менән тәрбиәләй, ҡайһы бер

# ЕТҺЕН ӨСӨН...

## нурлы булырға тейеш

саҡта уҡытыусының киләсәккә төбәп әйткән һүҙенең йоғонтоһо көслөрәк тә була. Әсәй булараҡ - өйҙә, уҡытыусы булараҡ мәктәптә лә минең төп тәрбиә ҡоралым - һүҙ. Башҡорт ғүмер буйы әйтеп-әйтеп тәрбиәләгән, атай сыбығы булған тип әйтһәләр ҙә, ул бик һирәк күренеш булған, беҙҙең халыҡ электән һүҙ, мәҡәл-әйтем, әкиәт аша, тәжрибәһе һәм, әлбиттә, үҙ шәхесе менән тәрбиәләгән.

**ГӨЛНАЗ:** Табип хатаһы һаулыҡҡа зыян килтерһә, уҡытыусы хатаһы балала ғүмерлеккә күңел яраһы ҡалдырыуы ихтимал. Уҡыусыны баһалаған уҡытыусы ла яңылыша ала, шулай ҙа бөтә синыф алдында ғәфү үтенеү кәрәкмәйҙер, тип уйлайым. Мәҫәлән, таҡтаға яҙғанда яңылышып китеп, уҡыусым уны күреп төҙәтә икән, уҡыусы уҡытыусыһынан яҡшыраҡ булырға тейеш, тип, уны маҡтап ебәреп тә хәлдән сығырға мөмкин бит. Шулай ҙа тәрбиә, аралашыу өлкәһендә хаталар булғанда уларҙы башҡа булдырмау, уҡыусының күңелен китмәү яғын ҡарарға кәрәк.

**ВЕНЕРА:** Әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусыларыма шулай тип әйтәм: "Бөгөн мин һеҙгә шундай баһа ҡуям, был минең баһам. Әммә төп баһаны тормош һеҙгә үҙе ҡуясаҡ. Тормошта үҙ урыныңды табаһың икән, ҡайһы бер фәндәрҙән "өслө" булып та, тормош һиңә "бишле" ҡуйыуы мөмкин". Ысынлап та, төп баһаны тормош менән ваҡыт ҡуя.

▸ **Уҡытыусы, бигерәк тә туған тел уҡытыусыһы булараҡ, мәктәптә ижади эшләү өсөн мөмкинлектәр бармы? Уҡытыусының ижади үҫеше өсөн нимәләр кәрәк?**

**ВЕНЕРА:** Ижади эшләү уҡытыусының күңел торошонан килә. Мин донъяны нисек күрәм, дәрестәрем балаларҙы тормошҡа әҙерләүҙә ниндәй урын алып тора - ошо һорауҙарға яуап биреүҙән башлайым эшемде. Ә футляр эсендә генә йәшәгән уҡытыусының ҡалыплашҡан дәрестәре бөгөнгө уҡыусыға ҡыҙыҡ та түгел. Йөкмәтке һөйләүҙән йәки автор нимә әйтергә теләгән тип һорауҙан ғына ижади эшләү килеп сыҡмай. Ҡайһы саҡта донъяға бала күҙлегенән ҡарарға ла кәрәк, ә үткәрелгән һәр дәрес, һәр сара баланы ниндәйҙер кимәлдә тормошҡа әҙерләй икән, ул үҙе үк ижади ҡараштыр. Ижади ысулдар ҡулланмаһам, эшемдең һөҙөмтәһе түбән булыр ине. Уҡыусыларым хөрмәт итеп, кәңәш һорап, юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингәндән һуң да һаман миңә киләләр икән, күңелдәренең бер өлөшөндә генә ошо әҫәр, ошо шағир, ошо яҙыусы тураһында бәләкәй генә бер фекер, уйланыу ҡалған икән, был һәйбәттер, тип иҫәпләйем.

**ГӨЛНАЗ:** Ҡала шарттарында уҡытҡанда ижади эшләү мөмкинлектәре тарыраҡ. Шулай ҙа үҙебеҙҙең ҡулдан килгән тиклем мәсьәләне хәл итергә тырышабыҙ. Йәш уҡытыусылар араһында ла һәләтле, ижади ҡарашлы уҡытыусылар бар, тик уларға мәктәп администрацияһы, методист ярҙамға килергә тейеш. Улар программа үтәлешен генә талап итһә, уҡытыусы ижади эшләй алмай. Шул уҡ ваҡытта уҡытыусының ижади йоғонтоһон ҡабул итерлек уҡыусылар булырға тейеш.

▸ **Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рәсәйҙә телдәр уҡытыу өлкәһендә бер нисек тә үтеп булмай торған ҡалып барлыҡҡа килә - ул грамматика ҡалыбы. Әҙәбиәт ул ҡалыптарҙан сығырға мөмкинлектәр бирһә лә, тел уҡытыуҙа был бер аҙ кәртәләр ҡуймаймы икән?**

**ВЕНЕРА:** Әгәр ҙә башҡорт теле дәрестәре ҡоро грамматикаға ғына ҡоролһа, балаға ҡыҙыҡ түгел, 45 минут буйы күнегеү күсереп, эйә, хәбәр табып һыҙып ҡына ултырһа, уҡыусы үҫешә алмай. Мин һәр ваҡыт ижади ҡараш яҡлы булдым һәм ниндәйҙер мөмкинлек табып, дәресте байытып ебәрергә тырышам.

**ГӨЛНАЗ:** Ҡала балалары өсөн башҡорт теле грамматикаһы ауыр бирелә. Ғөмүмән, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың концепцияһы дөрөҫ түгел, сөнки башҡортса уҡый-яҙа белмәгән балаға тарайтылған булһа ла башҡорт теле грамматикаһының бөтә конструкцияһын өйрәтеү ҡаралған. Бөгөн башҡорт теле уҡытыусыһының төп маҡсаты - һөйләшергә өйрәтеү, сит милләт балаларында башҡорт теленә хөрмәт уятыу. Был дәрестәрҙе тулыһынса аралашыу дәрестәренә әйләндерһәк тә хилаф булмаҫ ине. Башҡортса уҡып-яҙырға өйрәтеүҙең бер ауырлығы ла юҡ. Әммә дәреслектәрҙе мәктәптә бер көн уҡытып ҡарамаған ғалимдар яҙа, улар уҡыусыларҙың эске донъяһын аңламай ҙа, белергә лә теләмәй. Дәреслектәрҙә хатта ҡала балалары тормошонан алынған текстар ҙа юҡ: улар һаман ауыл тормошо тураһындағы текстар менән эшләргә мәжбүр, ә был уларға ҡыҙыҡ түгел. Өфөлә төрлө мәктәптәрҙә тәжрибә майҙансыҡтары төҙөп, дәрес өлгөләре яҙыу эше башланды, тик был йәш уҡытыусыларға ярҙам йөҙөнән эшләнә. Был проблеманы уҡытыусы ғына хәл итә алмай, туған телдәрҙе уҡытыу концепцияһына артабан ғалимдар, мәғариф етәкселәренең ҡыҫылышы кәрәк.

▸ **Һеҙ төрлө йылдарҙа Рәсәй кимәлендә туған тел уҡытыусылары конкурстарында ҡатнашҡанһығыҙ, абруйлы урындар алғанһығыҙ. Мәскәү, Рәсәй кимәлендә туған телдәрҙе, ғөмүмән, милли телдәрҙе уҡытыуға ике төрлө ҡараш йәшәй түгелме һуң? Һеҙҙе нисек ҡабул иттеләр?**

*Әҙәбиәт уҡытыусыһы һүҙ менән тәрбиәләй, ҡайһы бер саҡта уҡытыусының киләсәккә төбәп әйткән һүҙенең йоғонтоһо көслөрәк тә була. Әсәй булараҡ - өйҙә, уҡытыусы булараҡ мәктәптә лә минең төп тәрбиә ҡоралым - һүҙ. Башҡорт ғүмер буйы әйтеп-әйтеп тәрбиәләгән, атай сыбығы булған тип әйтһәләр ҙә, ул бик һирәк күренеш булған, беҙҙең халыҡ электән һүҙ, мәҡәл-әйтем, әкиәт аша, тәжрибәһе һәм, әлбиттә, үҙ шәхесе менән тәрбиәләгән.*

**ВЕНЕРА:** Мин 2008 йылда был конкурста ҡатнаштым. Беҙҙе Федераль мәғариф үҫтереү институтында (ФИРО) бик йылы ҡабул иттеләр. Ысынында, мин үҙебеҙгә насар ҡараш тойманым. Ләкин мин конкурсанттар менән аралашыу ваҡытында уларҙан үҙемде бер башҡа өҫтөн тойҙом. Ниңәме? Башҡа бер ерҙә лә Башҡортостандағы кеүек "Йыл уҡытыусыһы" кеүек конкурстар ҙурлап, дәүләт кимәлендә үткәрелмәй, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, тигән ҙур, абруйлы исемдәр, Президент премиялары бирелмәй. Беҙҙең республикала ғына Хөкүмәтебеҙ тарафынан башҡорт мәктәптәрендә рус теле, рус мәктәптәрендә башҡорт теле уҡытыусыһы өсөн махсус премия булдырылған. Үҙебеҙ менән уҡытыу-методик комплекс алып барғайныҡ, беҙҙә сыҡҡан китаптар, уҡытыусыларға булған методик әсбаптар, Бурятияны иҫәпләмәгәндә, бүтән төбәктәрҙә юҡ, йәғни ниндәйҙер кимәлдә был юҫыҡта республика алға киткән. Тағы ла шуны әйтеп киткем килә: минән алда был конкурсҡа Сибайҙан бик ижади уҡытыусы Хәйҙәр Тапаҡов менән Өфө ҡалаһынан Гүзәл Фәтхелисламова барғайны. Быйыл унда ҡатнашасаҡ уҡытыусының гран-при яулауын теләйем. Тапалған һуҡмаҡтан йөрөүе еңелерәк ул, сөнки барыбер һәр кеше ниндәйҙер тәжрибә туплап ҡайта, кәңәштәрен бирә. Былдай сараларҙың уҙғарылыуы федераль етәкселәргә туған телдәргә нығыраҡ иғтибар йүнәлтеү идеяһын нығытырға ярҙам итәләр, тик төбәктәрҙә туған тел уҡытыуға ҡаршы сығыш яһаусылар ҙа булды был конкурста.

**ГӨЛНАЗ:** Конкурсты ойоштороусы булып Милли мәғариф мәсьәләләре үҙәге тора, конкурсанттарға кире ҡараш бөтөнләй тойманым, юғиһә, улар былдай конкурс ойоштормаҫтар ине. Хатта былдай кимәлдәге бәйгеләр Федераль етәкселәргә туған телдәрҙе уҡытыу өлкәһендә ыңғай йоғонто яһай, тип әйтер инем. Тапалған һуҡмаҡтан йөрөүе, ысынлап та, еңелерәк. Миңә тиклем барған уҡытыусылар үҙҙәрен тик ыңғай яҡтан ғына күрһәтеп ҡайтҡас, беҙҙе бигерәк яҡшы ҡаршыланылар. Конкурста тағы ла нимәһе менән алдырҙыҡ: беҙҙең башҡорт милли костюмы шул тиклем матур, уны күреп, барыһы ла шаҡ ҡатты. Конкурстың талабы буйынса, һөнәр күрһәтеү, матур костюм тигән шарттар юҡ ине, тик бар конкурсанттарҙың да милли костюмда йөрөүен күреп, жюри ағзалары яңы конкурс өҫтәп ҡуйҙы. Интернет аша Башҡортостан менән бәйләнешкә инеп, "Бөрйән ҡыҙҙары" көйөн алдырып, бейеп тә күрһәттем.



▸ **Һеҙ башҡорт теле уҡытыусыһы һәм ҡатын-ҡыҙ булараҡ, үҙегеҙҙе бер образға нисек ярраштыраһығыҙ? Ғаиләлә ниндәй ҡатын, ниндәй әсәйһегеҙ?**

**ВЕНЕРА:** Туған тел уҡытыусыһының ни өсөн шулай бөтә яҡлап өлгө икәнлеген аңлатыуы бик еңел: сөнки беҙҙең ошо донъяға ҡарай торған да, кешеләрҙе тәрбиәләй торған да төп ҡоралыбыҙ - һүҙ. Ә был саҡта минең йөҙөм ихлас булмаһа, сырайым нурһыҙ булһа, был һүҙҙәр баланың йөрәгенә бер ҡасан да барып етмәйәсәк. Туған тел уҡытыусыларының һүҙҙәре һәм күңел донъяһы бер төрлө.

Бик һәйбәт тормош иптәшемен, тип, артығын маҡтанып ебәрә алмайым, ни өсөн тигәндә, күп ваҡытым мәктәптә үтә, быны өйҙәге яҡындарым аңлай. Шуға ла уларҙы ял көндәрендә үҙем яратҡан ҡамыр аштары менән һыйларға яратам. Өлкән улым әлеге көндә әрмелә хеҙмәт итә, бәләкәйе 6-сы синыфта уҡый. Һәр әсәй кеүек, мин уларға ҡәҙерлемендер, тием. Тормош иптәшемә ана шул алсаҡлығым, ихласлығым, матур һүҙҙәрем менән етмәгән сифаттарымды тултырырға тырышам. Бөтә донъямды онотоп, мөкиббән китеп өй эштәре менән булышып, өйҙә ултыра алмайым мин. Минең өсөн башҡа донъялар ҙа бар: эшем, башҡа йәмәғәт эштәре һ.б. Шул донъялар минең тормошомдо түп-түңәрәк итә.

Һәр бер ҡатын-ҡыҙ үҙ бәхетен үҙенсә күҙ алдына килтерә. Беҙҙең күҙ алдына килтергән был төшөнсәләр бер-береһенә оҡшамаған, сөнки ғалимдар әйтеүенсә, хатта ҡар бөртөктәре бер-береһенә оҡшамай. Әммә беҙҙе бер нәмә берләштерә: беҙ был Ер йөҙөнә йәшәргә һәм бәхетле булырға килгәнбеҙ.

**ГӨЛНАЗ:** Әсә теле уҡытыусыһы булғанға күрә лә, туған тел уҡытыусыһы башҡа төрлө була алмайҙыр ул. Ғөмүмән, һәр ҡатын-ҡыҙ һәр ваҡыт юғарыраҡҡа, матурлыҡҡа ынтылып йәшәргә тейештер, тип уйлайым. Үҙемдең уҡыусыларыма ла ҡыҙҙарыма ҡараған кеүек ҡарайым, тәрбиәләйем. Ҡатын-ҡыҙ булараҡ, татлы һүҙем һәм яҡты йөҙөм бала күңеленең бикле ишектәренә асҡыс яратырға, улар менән уртаҡ тел табырға ярҙам итә. Уҡытыу эше күп ваҡытымда алһа ла, беренсе урында ғаиләм тора. Тормош иптәшемде лә, ике ҡыҙымды ла өйҙә тәмле аш менән ҡаршыларға тырышам, уларға иғтибарымды, наҙымды йәлләмәйем. Өлгөлө уҡытыусы ғына түгел, өлгөлө әсәй һәм ҡатын булырға ла тырышам.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөгөнгө йәмғиәттә элекке аҡһаҡал, сәсән, мәғрифәтселәрҙең изге бурысын башҡарған, милләт тотҡаһы ла булған башҡорт теле уҡытыусыларын илаһи зат итеп ҡабул итерлек дәрәжәгә, баҡтиһәң, уларҙың эшенең, йәшәү мәғәнәһенең туған телгә, әсә теленә бәйле булыуы күтәрә икән! Һүҙ ҡәҙерен, һүҙ көсөн белгән, һүҙ аша киләсәк быуынды тәрбиәләгән уҡытыусының ғына йөрәге ҙур, күңеле матур ҙа, ихлас та була ала, ә эске матурлыҡ йөҙҙә һәм, бигерәк тә, күҙҙәрҙә сағылыш табып, уларҙы тағы ла нурлыраҡ итәләр. Сөнки, шағир әйтмешләй, һүҙ - хис-аҡыл, ул - мөхәббәт, һүҙ - илһам ул, ул -мәрхәмәт, һүҙ - илаһи, һүҙ - мөһабәт...**

**Ләйсән НАФИҠОВА менән Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

✓ Быйылғы йылдан алып Әлшәй районында ике йылға бер тапҡыр балаҫ һуғыу оҫталарының күргәҙмә фестивале үткәрелеп торасаҡ, шулай уҡ йыл һайын балаҫ йәрминкәһе уҙғарыласаҡ.



АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# АЛТЫНБАЙ ҠАРТ МӘҘӘКТӘРЕ

**Оло ҡайным Ҡәләмов Алтынбай Ҡотлоғәлләм улы тураһында бер нисә һүҙ әйтмәксемен. Ул 1901-1990 йылдарҙа Сораманда ғүмер кисерҙе. 80 йәште түңәрәкләүенә ҡарамаҫтан, йәштәрсә еңел һөйәкле ине. "Елфороз" ҡушаматы ла үҙенә тура килеп тора. Бер ҡараһаң - унда, икенсе ҡарауға - тегендә. Ел һымаҡ етеҙ йөрөгәнгә уны әбейе шулай атаған.Эске-фәләнде өнәп еткермәне. Туҡһанға етә яҙғанда ул үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр дауаханаға эләкте. Аяғының баш бармағына операция яһанылар. Ҡарттың ныҡлығына врачтарҙың аптырауҙары! Ҡалған сифаттарын һанап тормайынса ғына, төп фекергә күсәйем. Бәйән итәсәк һүҙем уның телмәр үҙенсәлегенә бәйле хәл-ваҡиғалар хаҡында.**

* * *

Бер йыл ҡышты ул беҙҙең янда үткәрҙе. Бергә алма һуты эсеп ултырабыҙ.

- Олатай, бына сок эс.
- Уныһы нимә тағы?
- Өс литрлыҡ банкаға алманың һыуын һалғандар.
- Һм. Алмаһын үҙҙәре ашағандар ҙа, һыуын ғына беҙгә ебәргәндәрме?

* * *

Уның күк бейәһе асыҡ дәрестәргә йөрөү өсөн берҙән-бер транспорт сараһы. Күсер - үҙе. Шулай бер мәл тауҙан аҫҡа ҡарай төшкәндә, хайуанҡай сығынсылап китте. Көскә тынысландырғас, олатай хәбәрен теҙә генә, тик киреһен һөйләгәнен аңғармай.

- Бына шулай ул минең бейә. Үргә табан ҡыуалайым тиһәң, сабырға тотона...

* * *

Күршеһенең хәлен белергә ингәне тураһында ла әйтергә онотмай олатай:

- Өйө өйҙә юҡ. Бисәһе һып-һыуыҡ...

* * *

Үҙенең тәүге ҡатыны үлгәндән һуң, икенсе йәмәғәтен алып ҡайтҡас та, ҡапыл өйҙә ут һүнә.

- Ҡайтып та индек, беҙ ҙә һүндек, - ти икән аҙаҡ олатай.

* * *

Урал Ҡотоев йәнә шуларҙы еткерҙе:

Ике ҡарт Яйыҡ йылғаһы аша арғы яҡҡа нисек сығырға белмәй, аптырап торалар, ти. Сиражетдин исемлеһе тәүәккәлләргә була: арбаһы-ние менән яҙғы ташҡын аша теге яҡҡа атын ҡыуалай. Көслө ағымдың уртаһына еткәс, арбаның артҡы яғы ысҡына ла ағып китә. Ә бабай уның алғы өлөшөнә тотоноп өлгөрә. Аты ярҙамында ярға барып сыға.

Алтынбай ҡарт, үҙенсә, ҡорҙашының хәленә кермәксе:

- Эй, Сирай, Яйыҡмы? Һыумы? Һыуыҡмы?

* * *

Алтынбай ҡарттың ейәне Зиннур Шоғайып улы минең йәмәғәтем. Әлеге көндә мәктәптә уҡытыусы булып эшләй. Сәсән телле, йор һүҙле ир уҙаманы. Ҡайһы саҡтарҙа олатаһына оҡшатыбыраҡ ебәрә.

Ҡунаҡҡа килгән ағай менән оҙон-оҙаҡ урам буйлап йөрөп, таң атыуға ғына ҡайтты был. Йоҡо аралаш тәҙрә төбөнән "Ғәлиәбаныу" көйөн ишетеп, өнөммө, төшөммө, тип ятам.

...Һөйөүҙәрең ысын булһа,

Ишегеңде аса һал, - тип йырлап, минән ишек астырмаҡсы икән.

* * *

Быныһы ла Зиннурҙың мәҙәктәренән:

- Илгиҙәр, яңы гәзиттәрҙе килтер әле?
- Почта килмәгән, атай.
- Иҫкеләрен килтер ҙә ҡуй. Баштүбән әйләндереп уҡырмын, ул саҡта яңы гәзит һымаҡ була...

* * *

Зиннурҙың тамағы быуылып, тауышһыҙ йөрөгән сағы. Әлдән-әле дауахана юлын тапай. Шулай бер мәл ҡаршыһына күптәнге танышы осрай. Ул Фәнит Шаһиев. Һәйтәк ауылына ит алырға килгәндәргә, беҙҙә фил ите генә һатыла, тип алдап, баҙарҙы шаулатҡан мәрәкәсел кеше. Билдәле, ике тел биҫтәһе араһында үҙ-ара "бәйге" китә.

- Хәлдәр нисек?
- Боҙоҡ телевизор һымаҡмын. Үҙем күренәм, ә тауыш юҡ.
- Бәй, лампочкаларыңды алыштыр.
- Бына, күрәһеңме дарыу шешәләре, файҙаһы юҡ.
- Әтеү антеннаңды ҡара. Уныһы урынында торамы?
- Тора, тора.
- Әтеү аҫтараҡ инде, юғарыға күтәреңкерә.
- Һуң уныһына кабель етеңкерәмәй бит әле...

* * *

Йорт бурау тураһында һүҙ сыҡҡас, Зиннур эргәһендәгеләрҙе аптыратҡан.

- Һеҙҙә һаман кешеләр бураймы ни? Ә беҙҙең яҡта компьютер бурай.
- Нисек инде?

Асыҡлыҡ керетеп ҡуя аҙаҡ:

- "Компьютер" ҡушаматлы ағай...

* * *

Мин сессияла саҡта был һис тә һыр бирергә теләмәй, ти:

- Һыйырҙарға автодойка ҡуйҙым әле... Быҙауҙарҙы ҡуштым...

* * *

Дүрт бала Наурыҙҙан ялға ҡайтып баралар. Бер малайҙа ғына саңғы. Ҡапыл буран сыға. Балалар сумкаларын баштарына кейергә мәжбүр.

Саңғы кейгән бала хәлде тиҙ төшөнөп ала. Алға шыуып бара бирә лә, туҡтап, иптәштәрен көтөп ала. Мәжит Ғафуриҙың шиғырын яттан һөйләп, дуҫтарын алға әйҙәй.

- Бер аҙым алға баҫам да
Әйләнәм мин артыма.
Ҡайҙа баҫҡандар икән, тип,
Күҙ һаламын халҡыма!
- Бирешмәгеҙ, малайҙар! Йәһәтерәк!

Шулай итеп, саҡ өйҙәренә ҡайтып йығылалар.

* * *

Зәйнәкәй ауылына барып етеүе ҡыйыныраҡ ул. Кеме йәйәү, кеме ниндәй транспорт таба әле. Берәүҙе ире комбайнға ултыртып алып бара хатта. Аҙаҡ бынан көләләр икән.

- Еңел-елпегә комбайн һәләк арыу ҙа ул.

* * *

Табында ултыралар. Иренең әлдән-әле рюмка күтәргәнен күреп ултырған ҡатын бер нисә тапҡыр өҫтәл аҫтынан тегенең аяғына баҫа. Уныһы ыжлап та бирмәй. Әммә ирҙең янында ултырған оло ағай, килен дә килен, тип, йәш ҡатынға көлөмһыйылым итә башлай, хатта бейергә саҡыра. Уртаға төшкәс кенә, бахыр ҡатын, хатаһын аңғарып ҡала: йәмәғәтенең һәм уның менән йәнәшә ултырғандың носкиҙары бер иштән була шул. Мәжлесте ташлап ҡайтырға тура килә йәштәргә.

**Зөлфиә ҒИЛМЕТДИНОВА.**
**Учалы районы.**

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# ЗАТЛЫ ЛА, ЗАУЫҠЛЫ ЛА...

## был аҫалы башҡорт балаҫы

**(Башы 1-се биттә).**

Яңыраҡ Әлшәй районында үткән "Дим буйы биҙәктәре" аҫалы балаҫ һуғыу оҫталары күргәҙмәһе фестивалендә мең төрлө балҡышҡа тап булғас, ысынлап та, аҫалы балаҫтың башҡорт донъяһының айырылғыһыҙ өлөшөн тәшкил итеүенә, балаҫ һуғыуҙың йортобоҙға төҫ, йәм биреүсе көнкүреш шөғөлө булыуына инандым. Һәр ваҡыт тәбиғәт ҡосағында йәшәгән халҡыма хас милли зауыҡ асылы ошо ижад өлгөләрендә лә асыҡ сағыла. Бына йондоҙ аҫа, баҙыян аҫа, ҡусҡар аҫа, самауыр тояҡ, сәскәләр яланы... Һәммәһе үҙенә генә хас серлелек менән арбай, һәммәһенә тәрән фәлсәфә һалынған, һәммәһендә башҡорт донъяһы сағылыш тапҡан. Бына оло-оло инәйҙәр йөн иләй, балаҫ һуға, йыр башлай, балалар ҙа уларҙан ҡалышмай. Ошондай хозур йәнлелектән залда ҡот хасил була, быуындар менән быуын тоташа.

Борон-борондан ата-бабаларҙан ҡалған балаҫ һуғыу шөғөлө ваҡыт-ваҡыты менән үҙенең кәрәклеген яңы быуындарға ла белдерә килә. Һуғыш йылдарында әле бала ғына көйө балаҫ һуғыу станогы артына ултырған инәйҙәр бөгөн үҙҙәре һуҡҡан балаҫтарының иҫәбе-һанын белмәй. Шундайҙарҙың береһе Әлшәй районы Әбделкәрим ауылынан 82 йәшлек Фатима инәй Шөғәйепова ун йәшенән тотона был шөғөлгә. Заманалар бер аҙ көйләнеп, йәшәйеш яҡшырып киткәс, балаҫ һуғыусылар һаны кәмей төшә. Ә илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, ваҡ-төйәк әйберҙәргә ҡытлыҡ кисергәндә йүнсел ҡатын-ҡыҙға тағы ла ошо шөғөл ярҙамға килә. Мәҫәлән, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Рабиға инәй Йәрмиева тап ана шул йылдарҙа тотона ла инде балаҫ һуғыу эшенә. Ә бөгөн ул һуҡҡан балаҫтар республикабыҙҙың бик күп йорттарына йәм өҫтәй. Уның ҡулдарының тилберлеген беҙ фестиваль барышындағы йөн иләү конкурсы аша ла баһалай алдыҡ. Ул бер йыр йырланғансы, бүтәндәрҙе күпкә уҙып, һигеҙ метр еп иләүгә өлгәште.

Бөгөн ауылдағы эшһеҙлек проблемаһын хәл итеү өсөн, нинә ошо күркәм шөғөлгә мөрәжәғәт итмәҫкә? Балаҫ һуғыу, әлбиттә, еңел эш түгел. Быны беҙ фестиваль барышында үткән мастер-класс аша ла, оҫтабикәләр менән аралашҡанда ла яҡшы аңланыҡ. Таһыллыҡ, көс, тырышлыҡ кеүек сифаттарҙан тыш, эске зауыҡ, фантазия байлығы, төҫтәр ярашыуын тойомлауҙы ла талап итә был шөғөл. Бына ошоларға тағы ла күңел йылыһы килеп ҡушылғанда бөтә яҡтан камил ижад өлгөһө барлыҡҡа килә. Шулай ҙа, теләк һәм тырышлыҡ булғанда, ҡулдан килмәҫтәй эш түгел. Һарыҡ аҫыраған кешегә ғаилә бюджетын тулылындырыу өсөн бик яҡшы кәсеп төрө ул. Әйтәйек, бер балаҫ һуғыу өсөн 2,5-3 кило, ҙурыраҡтары өсөн 5 кило йөн талап ителә. Оҫтабикәләр әйтеүенсә, өйрәнеп алғанда ун-ун биш көндә бер балаҫ һуғып бөтөргә мөмкин. Белеүебеҙсә, ҡул эше һәр ваҡыт юғары баһалана. Бөгөн тәбиғи йөндән һуғылған балаҫтар, ҙурлығына ҡарап, 7000-15000 мең, ә синтетик ептән эшләнгәне 3500 һум тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дим-Өршәк буйы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының төп ҡул эше - аҫалы балаҫ һуғыу яңырыу кисерә. Быға са өй күрке, бирнәлек өсөн һуғылған балаҫтарҙың киләсәктә табыш килтереүсе кәсепкә башланғыс бирәсәгенә ҙур өмөт бағлай сараны ойоштороусылар. Ә балаҫ һуғыу серенә төшөндөрөргә ярҙам итеүсе оҫтабикәләр күп был яҡтарҙа. Күргәҙмәгә Әлшәй районынан ғына 60 балаҫ килтерелгәйне. Быйылғы йылдан алып Әлшәй районында ике йылға бер тапҡыр балаҫ һуғыу оҫталарының күргәҙмә фестивале үткәрелеп торасаҡ, шулай уҡ йыл һайын март айының беренсе йәкшәмбеһендә балаҫ йәрминкәһе уҙғарыласаҡ.**

**Конкурс йомғаҡтарына килгәндә, тәҡдим ителгән береһенән-береһе матур йөҙгә яҡын балаҫ араһынан иң-иңдәре һайлап алынып, уларҙы ижад иткән ҡул оҫталары еңеүселәр тип билдәләнде. Әлшәй районынан Тәслимә Кәлимуллинаның эше Гран-приға лайыҡ, тип табылһа, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Рабиға Йәрмиеваға - беренсе, Бишбүләк районы Дүсән ауылынан Нәсимә Мөхөтдиноваға - икенсе һәм Миәкә районы Ҡолтай-Ҡаран ауылынан Мәҙинә Ғәзизуллинаға өсөнсө урын бирелде. Дәүләкән районы Ҡоръятмаҫ ауылынан Нажиә Әхмәтвәлиева махсус приз менән бүләкләнде.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**



✔ *Йортобоҙҙа башҡорт кешеһе йәшәй икәнлекте күрһәтеүсе икенсе билдә - милли музыка ҡоралыбыҙ ҡурай. Ғөмүмән, ҡурайһыҙ башҡорт донъяһын күҙ алдына килтереп булмай.*



## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Зәҡуан ӘХМӘТОВ, Әлшәй районы хакимиәте башлығы урынбаçары:** Аçалы балаç Дим буйы башҡорттарының элек-электән килгән төп шөғөлө булып тора. Бөгөнгө иҡтисади көрсөк шарттарында ауыл ерендә эш булдырыу, икенсенән, халҡыбыҙҙың боронғо йолаларын яңынан тергеҙеү маҡсатында быйыл тәүге тапҡыр ошо күркәм сара - аçалы балаç һуғыу оçталары күргәҙмәһе фестивален ойоштторҙоҡ. Һарыҡ йөнө бик арзан баһаланғанда, ә халыҡ эшһеҙ ҡалғанда, ни эшләп ошо килем килтерә торған кәсеп менән шөғөлләнмәçкә? Айына ике балаç һуҡҡанда ла 20-30 мең эшләргә мөмкин. Бөгөн был байрамда беҙҙең райондан тыш, Дәүләкән, Бишбүләк, Миәкә, Ғафури райондары оçталары ҡатнашыуы халыҡ кәсептәренең онотолмай, әле булһа йәшәп килеүе һәм уның киләсәгенә өмөт барлығы хаҡында һөйләй. Аçалы балаçта халыҡтың донъяға ҡарашы, фәлсәфәһе, матурлыҡҡа ынтылыуы сағыла.

**Нәсимә ЗӘЙҘУЛЛИНА, Әлшәй районы Ташлы ауылы оçтаһы:** Халҡыбыҙҙың боронғо шөғөлдәренең береһе - балаç һуғыу эше былай башҡарыла: һарыҡ йөнөн йыуып, һуғып, иләп, сираҡкас, төрлө төçтәге буяуға манаһың. Еп әҙер булғас, уны махсус станокта һуғаһың. Дөрөç итеп һәм көс һалып һуғылғанда ғына балаç сифатлы килеп сыға һәм оҙаҡҡа сыҙай. Төçтәргә килгәндә, балаç ҡара ерлеккә төрлө сәскәләр, милли орнаменттар, геометрик фигуралар төшөрөп эшләнә. Балаçтар ҡыҙҙарға бирнә итеп әҙерләнә, ғөмүмән, башҡорт донъяһын аçалы балаçһыҙ күҙ алдына ла килтереүе мөмкин түгел.

Әсәйем ғүмер буйы балаç һуҡты. Мин дә бәйләм бәйләп, юрған һырып, гел ҡул эше менән йәшәнем. Ваҡытың да бушҡа үтмәй, үҙ ҡулдарың менән эшләгән хеҙмәтең дә ҡәҙерле була. Хәҙер хаҡлы ялға сыҡҡас, балаç һуғырға өйрәндем. Мин шулай уҡ һарыҡ йөнөнән юрғандар эшләйем. Иллегә яҡын юрған һырыным. Бөгөн синтетик сүстәрҙән яһалған мендәр, юрғандар кеше организмы өсөн бик зарарлы, улар тәнде тын алдырмай. Ә тәбиғи йөндән һырылған юрған йылы, сәләмәтлек өсөн бик файҙалы, кешене тынысландырыу һәләтенә эйә. Бер юрған өсөн ун килограмм һарыҡ йөнө талап ителә. Уны йыуып, тетеп, таҙартҡас, 3 килограммлыҡ ике кешелек юрған килеп сыға. Бының өсөн өс һарыҡ йөнө кәрәк.

**Миңзәлә МУЛЛАҒОЛОВА, Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылы оçтаһы:** Үҙе көй сығарып, үҙе йырлаған атаһын хәтерләп, әсәйем Зөһрә Әхмәтова оҙон төндәр буйы балаç һуҡты. "Тәүге балаçымды 16 йәшемдә Миәкә районында йәшәүсе атайымдың бер туған апаһы Рәхимғолова Мәғүҙәнән ун көн эсендә өйрәнеп, һуғып ҡайттым, - тип һөйләй әсәйем. - Балаларыма, ейән-ейәнсәрҙәремә, туғандарыма, нәçелебеҙҙә булған бөтә ҡыҙҙарға бирнәлек һуҡтым. Әгәр ҙә шуларҙың бөтәһен бергә ҡушһаң, Ағиҙел йылғаһының буйы етмәç ине. Йөҙгә тиклем һананым, унан ашҡанын яңылыша башланым". Мин үҙем балаç һуғыусылар династияһының дүртенсе быуыны булып торам. Мәғүҙә әбейем, үҙе олоғая төшкәс, балаç һуғыу нескәлектәренең серҙәрен һәм был шөғөлдөң төп ҡоралы - ҡылысты әсәйемә тапшыра. Был ҡылыс әсәйемдең ҡулында 68 йыл хеҙмәт итә. Хәҙер ул минең ҡулыма күсте. Ғаиләбеҙ традицияһы булып торған был күркәм шөғөлдө мин ҡыҙым Илнараға һәм ағайымдың ҡыҙы Лилиәгә өйрәттем. Районыбыҙҙа үткән "Киләсәккә бер аҙым" тип аталған фәнни-ғәмәли конференцияла ике йыл рәттән ҡатнашып, ҡыҙым - икенсе, һеңлем Лилиә өсөнсө урын алды. Мин мәктәптә "Башҡортостан мәҙәниәте" һәм хеҙмәт дәрестәре уҡытыусыһымын. Мәктәптә "Оçта ҡулдар" түңәрәге алып барам, был шөғөлдө оçталарҙан өйрәнеп ҡалып, үҙемдән ҡалған үçеп килеүсе быуынға өйрәтергә тырышам.







ӘЙТӘГҮР!

# Ә БЫЛ ЙОРТТА КЕМ ЙӘШӘЙ?

## Ҡурайы булғас, башҡорт инде...

**"Һеҙҙең йортҡа ингән сит кеше бында башҡорт ғаиләһе йәшәй икәнен ниндәй билдәләр аша белә ала?" тигән һорау менән ҡалала ерегеп, күп йылдар дауамында ошо мөхиттә йәшәгән, балалар үçтергән милләттәштәребеҙгә мөрәжәғәт иттек.**

**Сәрүәр СУРИНА, тележурналист:** Беҙҙең йортҡа ингән һәр кеше өйөбөҙҙә башҡорт баçмаларының күп булыуына иғтибар итә. Балаларым бәләкәй саҡта, уларҙың һәр береһенә "Аҡбуҙат", "Аманат"ты айырым исемләтеп алдыра торғайным. Башҡорт гәзит-журналдарын алдырыуҙы мин үҙемдең гражданлыҡ бурысым, тип һанайым. Һәр яҡтан хәбәрҙар булып, илем, халҡым тормошон белеп йәшәргә тейешмендер, тип уйлайым. Ишектән ингәс тә күҙгә салынған, минең башҡорт икәнемде әйтеп торған беренсе билдә шул. Шулай уҡ был йортта башҡорт ғаиләһе йәшәй икәнен китап кәштәһендәге китаптар ҙа һөйләп тора. Башҡортостан энциклопедияһы, "Башҡорт халыҡ ижады"ның бөтә томдары, башҡорт халыҡ әкиәттәре, төрлө яҙыусыларыбыҙҙың, шағирҙарыбыҙҙың китаптары кәштәбеҙҙе йәмләп тора.

Һәр башҡорт ғаиләһенә хас икенсе билдә - милли ризыҡтарыбыҙ. Ғаиләбеҙ менән ҡоротлап, борослап һурпа эсергә яратабыҙ. Ҡороттан өҙөлгәнебеҙ юҡ, ауылдағы туғандарға рәхмәт! Милли ризыҡтарҙан бойҙай бутҡаһын яратабыҙ. Иң яратҡан ризыҡтарыбыҙҙың береһе - сөсө икмәк менән көлсә. Көлсәне йыш әҙерләйбеҙ, ул бик файҙалы ризыҡ. Ваҡыт булғанда талҡан, буҙа кеүек ризыҡтар әҙерләп, туғандарымды, таныштарымды һыйлап ҡыуандырам.

**Әхмәт ЯҠУПОВ, тележурналист:** Ысынлап та, беҙҙең һәр беребеҙҙең йортона ингәс тә, бында башҡорт кешеһе йәшәй икәнлеге ниндәйҙер билдәләрҙә сағылырға тейеш. Был иң тәүҙә ғаилә ағзаларының саф башҡорт телендә һөйләшеүенә ҡағыла. Ғаиләбеҙ менән йорт эсендә саф башҡортса аралашабыҙ.

Йортобоҙҙа башҡорт кешеһе йәшәй икәнлекте күрһәтеүсе икенсе билдә - милли музыка ҡоралыбыҙ ҡурай. Ғөмүмән, ҡурайһыҙ башҡорт донъяһын күҙ алдына килтереп булмай, ҡурай яҡты маяҡ кеүек, йортобоҙға йәм биреп тора. Беҙгә килгән ҡунаҡтарҙың иғтибарын иң тәүҙә ҡурай йәлеп итә һәм улар ҡыҙыҡһынып ҡурай тураһында һораша, алып өрөп ҡарай, милли музыка ҡоралының өй түренән урын алыуына һоҡлана.

Башҡорт телендә сыҡҡан бөтә гәзит-журналдарҙы ла алдырабыҙ һәм башҡа гәзит-журналдарҙан айырмалы рәүештә, уларға ниндәйҙер айырым хөрмәт күрһәтәбеҙ: улар бер ҡасан туҙып ятмай, әйбер төрөргә лә ҡулланылмай, һәр ҡайһыһының үҙ урыны бар.

Шулай уҡ башҡорт орнаментлы һауыт-һабалар, башҡорт донъяһын сағылдырған картиналар, сувенирҙар аша ла беҙҙең йортта Башҡортостандың илһөйәр кешеһе йәшәй икәнен белеп була.

**Нурфәйез БАҺАУЕТДИНОВ, мәктәп директоры:** Йортобоҙҙо матур башҡорт йыһаздары менән биҙәргә тырышабыҙ, тура килһә, һатып та алабыҙ. Йортобоҙға инеүсе сит кешеләр иң беренсе милли музыка ҡоралыбыҙ ҡурайға иғтибар итә. Үҙем байрамдарҙа ҡурайҙа үҙебеҙҙең көйҙәрҙе уйнап, килгән ҡунаҡтарҙың күңелен асам. Өйөбөҙҙә башҡорт китаптары, гәзит-журналдары күп. Балалар менән башҡортса аралашабыҙ. Килгән кешеләрҙе бишбармаҡ бешереп, ҡымыҙ, буҙа менән һыйлайбыҙ. Минеңсә, бына ошо билдәләр аша был йортта ысын башҡорт ғаиләһе йәшәй икәнлеген белеп була.

Өйөндә башҡорт милли әйберҙәрен күреп үçкән баланың күңелендә һәр ваҡыт милләтенә, халҡына ҡарата һөйөү, тәрән ихтирам һаҡланасаҡ. Шуға күрә милләттәштәремә, йортоғоҙға башҡорт орнаментлы әйберҙәр алығыҙ, был өйгә нур, ҡот ҡына өçтәйәсәк, тип әйтер инем.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

✓ **ВЦИОМ-дың аналитика бүлеге етәксеһе, социолог Леонид Бызов әйтеүенсә, илдә ярлылар һаны 8-10 процент тәшкил итә. Әммә халыҡ-ара стандарттар буйынса, ундайҙарҙың һаны 20-30 процент тирәһе.**



ИНТЕРНЕТТАН



# РӘСӘЙҘӘ... асығыусылар күпме?

■ Бөгөн Рәсәй халҡының 2-3 проценты йәки яҡынса 4 миллион кеше асыға. Халыҡ-ара стандарттар буйынса, халыҡтың 30 проценты сәләмәтлек өсөн кәрәкле кимәлдә аҡһымлы азыҡ һәм емеш-еләк һатып ала алмай. Асығыусыларҙың 3 проценты - асарбаҡтар, наркомандар булһа ла, рәсми статистика буйынса, 8-10 проценты "һуңғы сиккә еткән ярлылар".

■ Рәсәйлеләрҙең күп өлөшө аслыҡ тураһында телевизорҙан Африка илдәре тураһында репортаж ҡарағанда ғына иҫкә төшөрә. Әммә аслыҡ - насар үҫешкән илдәрҙә генә түгел, ә алдынғы дәүләттәрҙә лә булыуы ихтимал икән. Бары тик һуңғыларында аслыҡ халыҡтың бәләкәй генә процентына ҡағыла һәм йәйләп уларҙың һаулығын ҡаҡшата. Мәҫәлән, АҠШ-та халыҡтың 12 проценты туҡлану талондары ҡуллана, был процентты һандарға әйләндерһәң, Польша территорияһында йәшәүселәрҙең һаны килеп сыға. Рәсәйҙә даими асығыусылар һаны тағы ла юғарыраҡ. Бөгөн балыҡ һәм балыҡ продукттарын, ит, йәшелсә, емеш-еләк ҡулланыусылар күпкә кәмегән. Рәсәйҙә йән башына йылына 61 килограмм ит тура килһә (1990 йылда 75 кг), ҡайһы бер төбәктәрҙә был кимәл 40 килограмдан артмай (Дағстан, Ингушетия, Ҡабарҙы-Балҡар, Чечня). Кострома өлкәһендә йән башына 41 килограмм, Владимир өлкәһендә 46 килограмм ит тура килә.

■ ООН-дың Аҙыҡ-түлек һәм ауыл хужалығы ойошмаһы (ФАО) баһаһы буйынса, донъяла яҡынса бер миллиард кеше, ҡайһы бер Африка илдәрендә (мәҫәлән, Танзания, Зимбабва, Замбия) халыҡтың яртыһы асыға. Ойошма мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1995-1997 йылдарҙа халыҡтың 5 проценты ғына туйғансы ашамаһа, 2006 йылда был нисбәт 3 процентҡа тиклем түбәнәйгән.

■ Һуңғы йылдарҙа ФАО Рәсәйҙе асығыу күҙәтелгән илдәр исемлегенә индермәй. Әммә рәсәйлеләрҙең тейешенсә туҡланмауы тураһында "Левада-үҙәк" үткәргән һорау алыу һөҙөмтәләре һөйләй. 2001 йылда килемдәре аҙыҡ-түлек һатып алыуға ла етмәүе тураһында респонденттарҙың 22 проценты белдерһә, 2002 йылда ундайҙар һаны 19 процентҡа, 2003 йылда 15 процентҡа, 2004 йылда 18 процентҡа етә. 2005 йылда асығыусылар һаны 15 процентҡа тиклем кәмей һәм 2006 йылда 12 процентҡа етә. Тик 2007 йылда был һан тағы ла 14 процентҡа тиклем үҫә. 2008 йылда XXI быуаттың беренсе ун йыллығы эсендә рекорд һанға - 9 процентҡа тиклем түбәнәйә. Әммә 2009 йылда асығыусылар иҫәбе тағы ла күбәйә һәм ил буйынса халыҡтың 10 процентын тәшкил итә. Белгестәр иҫәпләүенсә, был илдә башланған көрсөк менән бәйле. ВЦИОМ-дың аналитика бүлеге етәксеһе, социолог Леонид Бызов әйтеүенсә, илдә ярлылар һаны 8-10 процент тәшкил итә. Әммә халыҡ-ара стандарттар буйынса, ундайҙарҙың һаны 20-30 процент тирәһе. Эксперт аңлатыуы буйынса, халыҡтың итте аҙ ҡулланыуы уларҙың асығыуы тураһында һөйләмәй, бары тик көрсөк һөҙөмтәһендә күптәр ҡиммәтле аҙыҡ-түлек һатып алмай башлаған. Дөйөм алғанда, иҡтисади көрсөк башланғандан алып, халыҡ аҡсаһын һаҡсылыҡҡа тотона башлаған. Аслыҡ бар илдәрҙә лә, шул иҫәптән, Рәсәйҙә лә бар. Социолог фекеренсә, ил халҡының 2-3 проценты асыға. Асығыусылар категорияһына, башлыса, наркомандар, асарбаҡтар һәм килемдә дөрөҫ ҡулланмаған ғаиләләр инә, - ти Бызов.

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

**Һәр бер спорт уйынының үҙенә генә хас фәлсәфәһе була. Бынан тыш, һәр бер спорт төрөнөң милли ерлеге булыуын да инҡар итеп булмай. Уйын фәлсәфәһе был спорт төрөн үҙ итеүсенең милли психологияһына ла тап килһә, уңышҡа өлгәшеүе күпкә еңелерәктер, моғайын. Рус лаптаһы менән шөғөлләнеүсе, Башҡорт дәүләт университетының физик культура һәм спорт кафедраһының өлкән уҡытыусыһы Рөстәм АСЛАЕВ милли уйындар, милли спорт төрҙәре, милли ярыштарҙың үҙенсәлектәре тураһында фекер йөрөтә.**

# СПОРТ УЙЫНЫНЫҢ ДА...

## милли ерлеге була

### Лапта рус уйыны ғына түгел

Һәр халыҡтың үҙенең милли уйындары була. Быуаттар дауамында был уйындар балалар һәм ололар тарафынан уйнала килә һәм мөһим сифаттар, әйтәйек, сыҙамлылыҡ, көс, етеҙлек, тиҙлек тәрбиәләүҙә генә түгел, ә ғәҙеллек, намыҫлылыҡ тойғолары уятыуҙа ла ҡатнаша. Рус лаптаһы тураһындағы тәүге мәғлүмәттәр боронғо яҙмаларҙа осрай. Археологтар боронғо Новгородты ҡазыған саҡта табылған предметтар араһында туп һәм уйынға исем биреүсе лаптаның (һуға торған таяҡ) булыуы ла рус халҡында был уйындың күптән йәшәүе тураһында һөйләй. Петр I заманында уны йәштәр яратып уйнай, хатта Семен, Преображенский, Шевардинский полктары һалдаттарының физик көсөн, таһыллығын арттырыуҙа, һуңғараҡ комиссар Подвойский ҙа Ҡыҙыл Армия хәрбиҙәрен әҙерләүҙә рус лаптаһын ҡуллана. Әммә шуны ла әйтергә кәрәк: лапта рус уйыны ғына түгел, донъя халыҡтарында был уйындың төрҙәре бик күп, уларҙың атамалары төрлө булһа ла, ҡағиҙәләрендә уртаҡлыҡ бар. Мәҫәлән, инглиздәрҙә - крикет, американлыларҙа - бейсбол, Куба халҡында - пелота, румындарҙа - ойма, финдарҙа - песа палло, немецтарҙа - шлагбал. Башҡортостандың ҡайһы бер райондарында, бигерәк тә республиканың көньяғында һуҡмартуп, сүрәкә һәм башҡа төрлө аталып йөрөгән уйындар осрай. Уларҙы, әлбиттә, профессиональ спорт төрө тип атап булмаһа ла, хәрәкәтле уйын булараҡ, балаларҙа көс, таһыллыҡ арттырыуҙа мөһим урын биләй. Беҙ ҙә малайҙар менән яҙ һайын ҡарҙан әрселәп башлаған урындарҙа: ҡапҡа алдында, баҫыуҙа йыйылып, командаға бүленеп уйнай инек. Тимәк, лапта беҙҙең халыҡтың психологияһына ла тап килә, юғиһә, башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары был уйын төрөнә тартылмаҫ ине.

Спорт төрөнөң, уйынының милли ерлеге булған кеүек, спорт төрҙәре милли менталитетҡа тап килергә тейештәр ул. Бер генә миҫал: яҡташыбыҙ Тамара Танһыҡҡужина шашка буйынса алдынғылыҡты бер кемгә лә бирмәй, ул уйын беҙгә яҡынраҡ, сөнки башҡорттар һәр ваҡыт асыҡтан-асыҡ, ихлас мөнәсәбәттәрҙе үҙ күрә, шашкала асыҡ яу, ә шахматта мәкер бар. Толстой башҡорттар араһында булғанда башҡорт уйындары, башҡорт ярыш төрҙәре менән дә шөғөлләнгән, шул уҡ ваҡытта урындағы халыҡҡа рус ярыш төрҙәрен өйрәткән, ә һабантуйҙарҙа ике милләт уйындары ла бергә башҡарылған. Былар хаҡындағы хәтирәләре уның яҙмаларында сағылыш тапҡан. Аяҡҡа арҡан эләктереп көс һынашыуҙа Толстой еңгән, ә көрәштә еңелгән. Ошонан сығып ҡына ла спорт төрөнөң кешенең булмышына тап килергә тейешлеге тураһында һүҙ йөрөтергә мөмкин. Рус лаптаһында ла уйын асыҡ майҙанда алып барыла, еңеүсе булыр өсөн тик үҙеңдән отҡорлоҡ, сослоҡ һәм командаңың бер һүҙле булыуы талап ителә, шуға ла мин уны, минең милли булмышыма тап килә, тип уйлайым.

### Өфө - лапта үҙәге

Мин лапта менән БДУ-ның Сибай институтына уҡырға килгәс шөғөлләнә башланым. Мәктәптә уҡығанда волейбол оҡшай ине, шуға ла ошо төргә махсуслашырмын, тип ниәтләнгәйнем. Тик бер тапҡыр секцияға йөрөүсе егеттәргә эйәреп, лапта уйнап ҡараным һәм тренер Йәмил Мәғәсүмов мине командаға саҡырҙы. Уйын етеҙлеге, мауыҡтырғыс булыуы менән бик оҡшаны. Етмәһә, ул саҡта уҡ Сибай институтының рус лаптаһы командаһы егеттәре республикала ғына түгел, Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнаша ине, ә волейболсылар ҡала, йә Сибай эргәһендәге яҡын райондарға ғына йөрөштәрә. Минең, мәктәптә яңы ғына тамамлап килгән ауыл малайының, сит ерҙәргә сығып, донъя күргe лә килә. Спорт менән профессиональ рәүештә шөғөлләнгәндә спортсыны матди дәртләндереү мөһим, бигерәк тә йәш саҡта быға ҙур иғтибар бирһәң. Мин дә шулай көтмәгәндә лапта уйынына ылыҡып киттем һәм бөгөнгө көндә уҡытыусы-тренер булараҡ, эшемдә БДУ-ла дауам итәм. Һәр уҡыу йылы башланғас та тәркөмдәр араһынан теләүселәрҙе секцияға саҡырабыҙ һәм команда төҙөйбөҙ.

Рус лаптаһы Башҡортостанда, бигерәк тә Өфө ҡалаһында ярайһы уҡ киң таралған спорт төрө. Мәктәп, ауыл, район беренселектәре үтеп тороуы, республиканың төрлө ҡалаларында турнирҙар ойошторолоуы быға дәлил булып тора. Был төр буйынса Башҡортостан спортсылары Рәсәйҙә алдынғылар рәтендә. Уйын һәм уны баһалау ҡағиҙәләре лә беҙҙең республикала эшләнгән, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында республиканың рус лаптаһы федерацияһы урынлашҡан, ошонда уҡ белгестәр ҙә әҙерләнә.

Былтыр Анапалағы ярышта Башҡортостандың йыйылма командаһы - өсөнсө, БДПУ-ның ҡыҙҙар командаһы беренсе урынды яуланы. Рус лаптаһының пляж лаптаһы тип аталып йөрөтөлгәне лә үҫешә башланы, был төрҙә лә маҡтанырлыҡ һөҙөмтәләр бар, БДПУ, БДУ, БДАУ студенттары, ветерандар командалары алдынғы урындар яулай. Яңыраҡ Түбәнге Тагилда үткән ярыштарҙа ететтәр шулай уҡ өсөнсө, ҡыҙҙар беренсе урын алды.

### Спорт милләтте күтәрә ала

Лапта мине командалы уйын булыуы менән йәлеп итә, йәғни уйындың һөҙөмтәһе команданың берҙәмлегенән, етеҙлегенән һәм уйынды бер-береһен дөрөҫ аңлап ҡороуынан тора. Был спорт ҡиммәтле ҡоралдар менән йыһазландырылған зал да, махсус кейем дә, инвентарь ҙа талап итмәй. Лаптаны йәйен дә, ҡышын да уйнарға мөмкин. Лапта менән мәктәпкәсә йәштәге балалар ҙа шөғөлләнә ала, сөнки быны өсөн уйынсыға махсус әҙерлек кәрәкмәй. Был саҡта балала тормош көткәндә кәрәк булған мөһим сифаттарҙың барыһы ла бәләкәйҙән үк формалаша. Экстремаль ситуацияларҙа тиҙ генә дөрөҫ ҡарар ҡабул итеүҙән башлап, отҡорлоҡ, сослоҡ, етеҙлек кеүек сифаттарҙы үҫтерергә мөмкинлек биргән был спорт төрө башҡорт егеттәренә хас оялсанлыҡты еңергә лә ярҙам итә. Саф һауалағы уйын, бигерәк тә яҙ һәм көҙ мәлдәрендә, һис шикһеҙ организмдың төрлө инфекцияларға ҡаршы тороусанлығын да көсәйтмәй ҡалмай. Шуға ла, әгәр мөмкинлектәре бар икән, ата-әсәләр балаларын был спорт төрөнә ылыҡтыра ала. Спорт менән шөғөлләнгән кешеләр башҡаларға ҡарағанда сыҙамлыраҡ та була, ихтыяр көсө ныҡына. Спорт, сәләмәт йәшәү рәүеше үсмерҙе һыра эсеү, тәмәке тартыу кеүек насар ғәҙәттәрҙән дә аралай.

"Салауат Юлаев" хоккей командаһы миҫалында ниндәй ҙә булһа спорт төрөн үҫтереп, милләтте лә күтәреп була икәнен күрҙек бит инде. Канадала хоккей милли спорт төрө иҫәпләнә, хоккейһыҙ Канаданы күҙ алдына килтереп булмай. Беҙҙә, моғайын да, ат сабышы, милли көрәш халыҡты күтәрә алыр ине. Шулай ҙа бөгөн спортҡа тартылыусы йәштәр һирәк, сөнки балалар бөгөн өйҙә телевизор ҡарап, компьютерҙа уйнап ҡына ултыра. Беҙ үҫкән саҡта улай булманы. Тиҫтер малайҙар менән хоккей, футбол, хатта баҡса аша волейбол да уйнай инек, тәнәфес тамамланғас, уҡытыусылар беҙҙе спорт залынан ҡыуалап тигәндәй дәрескә индереп ебәрә торғайны. Уҡытыусы һөнәрен һайлауыма ла Ейәнсура районы Абзан мәктәбе физкультура уҡытыусыһы Булат Рәшит улы Арыҫланбаевтың мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы дәрестәре этәргес биргәндер. Бөгөн мин БДУ-ла эшләйем, унда студенттарға спорт менән шөғөлләнеү өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылған, бокс, кикбоксинг, уйын төрҙәре: баскетбол, волейбол, футбол - барыһы ла бар. Студенттар менән эшләүе еңелерәк, улар мәктәп уҡыусыһына ҡарағанда үҙ фекере формалашҡан, юғары белем кәрәклеген аңлап уҡыған кешеләр. Әммә студенттарҙы спортҡа күпләп ылыҡтырып булмай, сөнки ҙур ҡалала аҡса эшләү мөмкинлеге булғас, улар уҡыуҙан саҡ ҡына бушау менән, эшләргә ынтыла башлай. Башлыса бала саҡтан спорт менән шөғөлләнгәндәр спортты ташлай алмай, шуға ла сәләмәт йәшәү рәүешенә лә нигеҙ бала саҡта уҡ һалына, тип раҫлай алам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр спорт төрөнөң кешенең тәбиғәт, Хоҙай Тәғәлә тарафынан һалынған мөмкинлектәрен уятыуҙа әһәмиәте ҙур, әлбиттә. Бынан тыш, боронғо тәрбиә алымдары онотолоп бөтә яҙған мәлдә, күп үҫмерҙәрҙең урам ҡыҙырып йәки компьютер алдында ғына ултырып ваҡыт уҙғарған сағында спорт тәрбиә ысулы ла, йәштәребеҙ араһында сәләмәт йәшәү рәүешен таратыу мөмкинлеге лә, милләтте күтәреү сараһы ла була алыр ине, тигән фекергә килдек әңгәмәсем Рөстәм Зәйнәғәбдин улы менән. Бәлки, тап спорт уйындары аша йәмғиәтебеҙгә намыҫ, ғәҙеллек төшөнсәһен дә кире ҡайтара алырбыҙ? Был турала һеҙ нимә уйлайһығыҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ?**

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*



# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

## Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

* * *

Һуңынан Аллаһ илсеһе уға үҙенең сәхәбәләре хаҡында бер нисә һорау бирҙе:

- Әбү Бәкер хаҡында нимә әйтерһең?

Иблис:

- Ул минең артымдан хатта йәһилиәт ваҡытында ла эйәрмәне... Ә мосолман булғас, миңә буйһона буламы һуң инде?

- Ярар, ә Ғүмәр бин Хаттаб тураһында ни әйтерһең?

- Аллаһ менән ант итәм: ҡайҙа ғына күрһәм дә, мин унан ҡасам.

- Ә Усман бин Аффан хаҡында ни әйтерһең?

- Мин унан ояламм... Ныҡ оялам... Шулай булмай ней, Аллаһтың фәрештәләре лә унан ояла бит.

- Яҡшы. Ә Ғәли бин Әбү Талиб хаҡында ни әйтерһең?

Уның тураһында Иблис былай тине:

- Эх, әгәр ҙә мин уның ҡулдарынан ҡотола алһам... Эх, әгәр ҙә ул яңғыҙ ҡалһа, мин дә яңғыҙ ҡалыр инем... Әгәр ул миңә бәйләнмәһә, мин дә уны тыныслыҡта ҡалдырыр инем...

Аллаһ илсеһе, шайтандан үҙенең һорауҙарына яуап алып бөткәс, былай тине:

- Минең өммәтемдә бәхетле иткән һәм билдәләнгән ваҡытҡа тиклем һине һынау итеп ебәргән өсөн Аллаһы Тәғәләгә маҡтауҙар булһын!

Ҡәһәрләнгән Иблис, Аллаһ илсеһенең был һүҙҙәрен ишетеп, ҡысҡырып ебәрҙе:

- Юҡ инде, юҡ! Һинең өммәтең өсөн бәхет ҡайҙа? Мин тере саҡта һәм билдәләнгән ваҡытҡа тиклем йәшәгәндә һин нисек үҙеңдең өммәтең өсөн тыныс була алаһың? Мин бит уларҙың ҡан тамырҙарына тиклем үтеп инәсәкмен. Мин уларҙың мускулдары менән туҡланам. Әммә улар бит быны күрмәйәсәк тә, белмәйәсәк тә.

Мине яралтҡан һәм Ҡиәмәт көнөнә тиклем миңә ваҡыт биргән Аллаһ менән ант итәм, мин уларҙың бөтәһен дә аҙҙырасаҡмын. Наҙандарын да, ғалимдарын да... Ғилемлеләрен дә, ғилемһеҙҙәрен дә... Гонаһлыларын да, тәҡүәлеләрен дә... Асылда, уларҙың бер кеме лә минең ҡулымдан ысҡына алмаç. Шулай ҙа... Аллаһтың ихлас ҡолдарынан башҡалары... Эйе, мин уларҙы юлдан яҙҙыра алмайым.

Аллаһ илсеһе:

- Һинеңсә, Аллаһы Тәғәләнең ихлас ҡолдары кемдәр? - тип һораны.

Иблис былай тип яуап бирҙе:

- Белмәйһеңме ни? О, Мөхәммәт, дирһәм, динар яратыусылар бар... Улар Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында ихлас түгел.

Икенселәре, аҡсаға ҡыҙыҡмаған, маҡтаныրға һәм үҙен маҡтағандарын яратмағандар бар... Мин уларҙың ихлас икәндәрен беләм. Мин уларҙы шунда уҡ ташлайым һәм ҡасам.

Байлыҡты һәм ярамһаҡланыуҙы яратҡан, йөрәктәре ер теләктәре менән тулған кешеләр - минең иң тоғро кешеләрем, мин уларҙы алдап, үҙемә ҡараттым.

Байлыҡты һөйөү - иң ҙур гонаһтарҙың береһе икәнде һин белмәйһеңме ни?

Етәкселеккә ҡомһоҙланып ынтылыу - иң ҙур гонаһтарҙың береһе икәнде һин белмәйһеңме ни?

Иблис һөйләүен дауам итте:

- О, Мөхәммәт, һин белмәйһеңме ни? Минең етмеш мең балам бар. Мин уларҙың һәр береһен һәр өлкәгә һаҡсы итеп ҡуйҙым.

Ә минең һәр баламдың етмеш мең шайтаны бар.

Уларҙың бер өлөшөн мин ғалимдарға ебәрҙем.

Ә бер өлөшөн - йәштәргә, бер өлөшөн - ҡарттарға, бер өлөшөн оло ҡатындарға ебәрҙем.

Йәштәргә килгәндә, беҙҙең арала аңлашылмаусанлыҡтар юҡ. Улар менән беҙ тиҙ уртаҡ тел табабыҙ.

Балаларға килгәндә... Улар ҙа беҙҙең балалар кеүек үк уйнай. Ә беҙҙең балаларҙың бер өлөшөнә мин тәҡүәле кешеләрҙең балаларына ауырыу йөкторорға ҡуштым, ә бер өлөшөн гонаһлыларҙың балаларына ебәрҙем.

Шайтандар кешегә килә, уны бер хәлдән икенсе хәлгә этә, бер сиктән икенсе сиккә ташлай. Һәм уларҙы шул хәлгә тиклем еткерә: улар әрләшә һәм бер-береһенә бер ниндәй сәбәпһеҙ ташлана башлай... Әммә үҙҙәренең был хәлен улар үҙҙәре лә төшөнә алмай.

Һуңынан Иблис нисек бер монахты алдағанын һөйләне:

- О, Мөхәммәт, һинең Барсис исемле монах тураһында ишеткәнең юҡмы ни? Ул етмеш йыл буйына Аллаһы Тәғәләгә ихлас ғибәҙәт иткән. Үҙенең ғибәҙәте арҡаһында ул шундай кимәлгә лайыҡ булған: уның ауырыуҙарға теләгән һәр доғаһы Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡабул булған һәм улар йүнәлеп киткән.

Мин уны бер генә минутҡа ла яңғыҙ ҡалдырмай, күҙәтә башланым... Һәм бына ул зина ҡылды. Һуңынан - кеше үлтерҙе. Һәм, ниһайәт, имандан тайпылды.

Ул Аллаһы Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә әйткән кешеләр араһынан: "Монафиҡтарҙың хәле иһә шайтандың хәле кеүек. Шайтан кешегә: "Инҡар ит!" - тине. Кеше инҡар иткәс: "Мин һеҙҙән йыраҡ торам, сөнки мин ғаләмдәрҙең Раббыһы булған Аллаһтан ҡурҡам, - ти" ("Әл- Хәшер", 59/16).

**(Дауамы бар).**

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

# ҺАРАН БУЛМА...

## сиргә юлығырһың

**Һаран кешеләр башҡаларға ҡарағанда йышыраҡ йөкһоҙлоҡ һәм неврездар менән яфалана. Һаран кешеләрҙең стресс гормондары кимәле һәр саҡ юғарыраҡ була, шуға ла улар гипертония, инфаркт, инсульт һәм ҡайһы бер тире ауырыуҙарына тиҙерәк бирешә.**

Был тормошта уҙ урынын тапҡан, етеш йәшәгән ирҙәрҙең 80 проценты ҡатындарының яуыз һәм мыжыҡ булыуына зарланыусан. Психологтар фекеренсә, тап ҡатындарҙың юғары талабы ирҙәрҙе күберәк аҡса эшләргә этәрә.

18 процент ирҙәр ҡатындарының әйберҙәрҙе күпмегә һатып алыуын тикшереп тора. 7 процент ҡатын-ҡыҙ тотонған һәр тине өсөн ире алдында яуап бирә. Әммә 60 процент ҡатын-ҡыҙ күпме аҡса тотоноуын иренә үҙе теләһә генә әйтә.

Рәсәй халҡының 85 проценты лотерея уйнай. Уларҙың 50 проценты лотереяны ваҡыты-ваҡыты менән, 30 проценты - айына бер тапҡыр, 15 проценты аҙна һайын һатып ала.

Рәсәйҙә йәшәүсе 10 процент ҡатын-ҡыҙ һәр саҡ иренән аҡса һорарға мәжбүр булыуы тураһында белдерә. Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙарының 45 проценты бер ҡасан ирҙәренән аҡса һорағаны юҡ.

Ҙур күләмдә аҡса отҡан кешеләрҙең 70 проценты уларҙы шунда уҡ туҙҙырып бөткән.

Бельгия халҡының 25 проценты "ҡара көн"гә аҡса йыя, итальяндарҙың 18 проценты ай һайын килемдәренең бер өлөшөн һаҡлыҡҡа һалып ҡуя. Һаҡлыҡ буйынса өсөнсө урында - япондар, дүртенсе урында ирланд халҡы тора.

Аҡса уҙ-үҙенә ныҡ ышанған кешеләрҙе ярата. Психологтар фекеренсә, һәр һөнәрҙә лә эш хаҡы хеҙмәткәрҙең һөнәри кимәленә түгел, ә уның амбицияларына һәм уҙбаһаһына бәйле.

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Уңышһыҙ план төҙөү - уңышһыҙлыҡты планлаштырыу ул

Әгәр һин үҙең белмәгән тарафҡа автомобилдә юл торға булһаң, иң тәүҙә юл картаһын өйрәнә башлайһың. Унда һин тәғәйенләнгән нөктәгә төрлө маршруттар менән барып булыуын күрәһең. Әгәр инде тиҙерәк барып етергә кәрәк икән, һин турараҡ юлды һайлайһың. Ҡулыңда юл картаһы булғанда, һин был сәфәр күпме ваҡыт дауам итеүен һәм тәғәйенләнгән урынға ҡасан барып етеүеңде аныҡ билдәләй алаһың.

Тормошта ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшеү өсөн дә был хәҡиҡәт булып тора. "Юл картаһы" булмағанда, һинең аңыңдың һөҙөмтәле ҡарар ҡабул итеү мөмкинлеге булмай, ул маҡсатыңа аҙашып йөрөйәсәк. Ә инде төрлө юлдарҙы өйрәнеп, план төҙөгәндә, һин уйыңды бер әйбергә генә йүнәлтеп, үҙең һайлаған теләнә ҡайһы маҡсатҡа өлгәшеү һәләтенә эйә буласаҡһың.

Күптәр үҙенең тормоштан нимә алырға теләгәнен белә, әммә уларҙың бик аҙы ғына хыялын яҡшы уйланылған уңыш картаһына әүерелдерә ала. Йыш ҡына был уңыш осраҡлыҡтарға йәки бүтән кешеләрҙең ярҙамына бәйле. Уңышһыҙлыҡ кисереүселәрҙең ҡайһы берәүҙәре эштәре алға барғандарға ҡарап, "Уларға кәрәкле кешеләр менән танышыу бәхете тейҙе" йәки "Уларға һәр ваҡыт уңайлы мөмкинлектәр сығып ҡына тора", - ти. Ысынында иһә, уңышлы кеше илдең бер осонан икенсеһенә барыуҙы яҡшылап планлаштырған кеүек үк, уңышҡа өлгәшә йәки кәрәкле кешеләр менән таныша ала. Эйе, алдыңа алған маҡсатыңа табан барғанда уға өлгәшергә ярҙам итә алырҙай кешеләрҙе осрата алаһың. Шулай уҡ бүтәндәргә осрамаç "көтөлмәгән" ыңғай мөмкинлектәр ҙә юлыңа сығып торасаҡ. Әммә һин был "көтөлмәгән" мөмкинлекте маҡсатың һәм планың булыу арҡаһында яулауыңды беләсәкһең.

Эш итеү планын төҙөгәндә, уйыңда нимәгә өлгәшергә теләүеңде күҙ алдына килтереп, уны ҡағыҙ битенең өҫкө өлөшөнә яҙып ҡуй, ә аҫҡа был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн ниндәй аҙымдар яһарға кәрәклеген теркә. Оҙайлы маҡсаттар өсөн, әлбиттә, күберәк аҙымдар һәм ҡатмарлыраҡ планлаштырыу талап ителә, әммә принцип бер үк ҡала. Планың әҙер булыу менән, был мәсьәләгә ҡағылышлы яңы мәғлүмәттәр туплауға ҡарап, көн һайын уның өҫтөндә эшләүеңде дауам ит. Унан һуң эшкә тотон һәм теләгән һөҙөмтәгә өлгәшмәйенсә туҡтама.

"Иң уңышлы кешеләрҙең ете ғәҙәте" китабы авторы Стивен Кови "планлаштырыуҙы уның аҙағын күҙ алдына килтереүҙән башларға" тәҡдим итә. Берәй проектмы ул, йәки ябай көндәлек бурыстармы, алдыңа маҡсат ҡуйған саҡта уға өлгәшеү өсөн кәрәкле аҙымдарҙы иҫәпкә ал. Әгәр һинең маҡсатың күп кимәлдән тора икән, уларҙы өҫтөнлөгөнә ҡарап урынлаштырырға кәрәк булыр. А, Б йәки В тигән хәрефтәр менән билдәләп, исемлек төҙә һәм А-нан башлап уларҙы башҡарыуыңды дауам ит. Профессиональ план төҙөүселәр ҡағыҙға яҙылған бурыстарҙың башлыса тормошҡа ашыуын билдәләй. Түбәндәге биш ҡағиҙә ҡуйылған маҡсатыңа өлгәшергә ярҙам итәсәк.

1. Маҡсатыңды ниндәйҙер билдәле әйбер менән сағыштыр һәм аныҡ терминдар ҡуллан.
2. Маҡсатыңа ҡағылған бөтә нәмәне лә деталдәре менән яҙып сыҡ.
3. Был маҡсатыңды аңыңда нығыт һәм уның тураһында көн һайын уйлан.
4. Маҡсатыңа ҡағылышлы бөтә нәмәне лә асыҡла.
5. Көсөңдән килгән тиклем бөтә күнелендә биреп эшлә һәм бөтә ыңғай мөмкинлектәрҙе лә ҡуллан.

"Уңышһыҙ план төҙөү - ул уңышһыҙлыҡты планлаштырыу" булыуын онотма. Юл картаһы сәйәхәт итеү өсөн кәрәкле ҡорал булған кеүек, план һинең тормош маҡсатыңа ҡарай сәйәхәт итеү өсөн кәрәкле ҡорал булып тора. Тормошта уңыш ҡаҙаныу өсөн планыңа ҡарап эш ит.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

**Үткән аҙнала Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры башҡорт халҡының бөйөк улы Зәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға һәм Республика йылына арнап, "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" спектакле премьераһын тамашасы хөкөмөнә тәҡдим итте. Уны Нәжиб Асанбаевтың трилогияһы мотивтары буйынса һәм Әхмәтзәки Вәлидиҙең хәтирәләре нигеҙендә театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов сәхнәләштерҙе. Тамамланмаған хәтирәләр жанрында ҡуйылған спектаклдә театр коллективының утыҙҙан ашыу артисы ҡатнаша. Зәки Вәлиди шәхесенең тормош юлы баштан алып аҙағына тиклем сағылдырылып, уның образы өс осорҙа: йәшлек сағы, урта йәштәге ир ҡоро һәм иң өлкән ваҡыты һынландырыла. Төрлө осорҙағы Вәлидиҙе Фәнис Рәхмәтов, Артур Ҡунаҡбаев, Илдар Ғүмәров һәм Хәмит Яруллин башҡара. Әҫәр тураһында фекерҙәрен һорап, ижадсыларҙың үҙҙәренә мөрәжәғәт иттек:**

# СӘХНӘЛӘРГӘ ГЕНӘ ТҮГЕЛ...

## һәр йөрәккә ҡайтһын Зәки рухы

**Айрат АБУШАХМАНОВ, режиссер:** 2001 йылда трилогия авторы Нәжиб Асанбаев Зәки Вәлиди шәхесенә арналған әҫәр яҙа башланы. Был шәхес тормошо шул тиклем йөкмәткеле, уны бер пьесаға ғына һыйҙырып бөтөп булмай. Уның хәтирәләре буйынса ғына ла ун бишләп пьеса яҙырға мөмкин. Беҙҙең маҡсат тәрәнгә төшмәй генә Зәки Вәлидиҙең бөтә тормош юлын күрһәтеп биреү ине. Образ бик ҡатмарлы булғас, һаҡ эш итергә, шәхестең үҙебеҙ белеп бөтмәгән яҡтарын күрһәтмәҫкә тырыштыҡ. Беҙ уны тормошоноң төүге яртыһында милләт үҙаллылығы өсөн көрәшсе, артабан фән әһеле булараҡ асырға тырыштыҡ. Әлбиттә, Төркиәлә йәшәгән дәүере тураһында хәтирәләрендә артыҡ мәғлүмәттәр юҡ, сөнки ул бында башлыса ғилми хеҙмәттәр яҙыу менән мәшғүл булған. Шуға ла ундағы Зәки Вәлиди образын асыу еңел булманы, күп эҙләнергә, өйрәнергә тура килде. Беҙ, тарихи мәғлүмәттәрҙә ҡаҙынғандан һуң, Ататөрктөң Зәки Вәлиди менән фән өлкәһендә уртаҡ тел таба алмаһа ла, ысынында уны шәхес булараҡ ихтирам итеүен асыҡланыҡ һәм пьесаға төҙәтмә индерҙек. Төркиәнең иң эре уҡыу йорттарының береһе булған Стамбул университеты ректоры: "Мин төрөк һәм көнсығыш телдәрен өйрәнеү буйынса Зәки Вәлидиҙе ғалим булараҡ беренсе урынға ҡуйыр инем", - тигәйне. Шуға ла беҙ был спектаклдә төрөк халҡына ла күрһәтергә тейешбеҙ, ни тиһәң дә, Төркиә Зәки Вәлидиҙе үҙ ҡанаты аҫтына һыйындырған икенсе тыуған иле булып тора бит.

Ә башҡорт донъяһына килгәндә, инҡилаб заманында Зәки Вәлидиҙең үҙ милләтен һаҡлап ҡалырға теләүен асып биреү ауырыраҡ булды. Арабыҙҙа: "Зәки Вәлиди тыуған иленән ҡасҡан, уның милли рухы булмаған", - тип әйтеүселәр ҙә юҡ түгел. Ә уйлап ҡараһаң, башҡорт булараҡ сит ерҙә йәшәп, 400-ҙән ашыу китап яҙған затты бөгөн "мин - башҡорт", тип һөрәнләп йөрөгән кеше менән сағыштырыу урынлы түгел. Беҙ ни өсөндөр төүҙә шәхестәребеҙҙе ситкә тибәрәбеҙ, аҙаҡ, ваҡыты уҙғас, ҡәҙерен аңлай башлайбыҙ. Зәки Вәлиди һәр ваҡыт тыуған яғын һағынып йәшәгән. "Әгәр ҙә тыуған яғыма ҡайтыу мөмкинлеге булһа, ҡалған ғүмеремде Башҡортостанымдың иң төпкөл ауылындағы бер бәләкәй генә мәктәптә булһа ла уҡытыу эшенә бағышлар инем", - тип хыялланған ул. Бер нисә бейә алып, ҡымыҙ эшләп ҡарауы, әммә унда тыуған яҡ үләндәренең тәмен тоймауы ла беҙгә мәғлүм.

**Илдар ҒҮМӘРОВ:** Зәки Вәлиди шәхесе менән яҡындан төүгә тапҡыр 1997 йылда, ҡулыма уның "Хәтирәләр" китабын алғас, танышҡайным. Бик ҡатмарлы образ - уны бөтә тулылығында ике сәғәтлек спектаклдә генә күҙаллау мөмкин түгел. Беҙ Зәки Вәлидиҙең ҡайһы ғына йәш осорон күҙәтәләндерһәк тә, тышҡы йөҙ, хәрәкәт оҡшашлығына артыҡ иғтибар итмәй, уның донъяға ҡарашын, фекерләү ҡеүәһен, эске донъяһын асыуҙы маҡсат итеп ҡуйбыҙ. Беҙҙең йәш Зәки Вәлиди образы асыҡ, эмоциональ. Ул автономия төҙөй. Урта йәштәге Зәки Вәлиди тормоштоң әсеһен татырға өлгөргән, шуға ла уйлап эш итә. Ә өлкән Зәки Вәлиди аҡыл эйәһен күҙәләндерә. Ул көслө шәхес, фекерҙәр вулканы булыуына ҡарамаҫтан, йомшаҡ күңелле ижады булып торған. Уның башҡорт халҡына яҙған һуңғы хатында бик ҡиммәтле фекере бар. "Динде һаҡлағыҙ", - ти ул. Ә дин - ул иман. Башҡорт халҡы суҡмар тотоп, ил баҫмаған, үҙ ерен һаҡлаған. Иман булһа, ҡайһы ғына халыҡ, ниндәй генә дәүләт ҡороло-шонда йәшәмәһен, донъя - беҙҙең өсөн ожмах булды, беҙ унан ҡәнәғәт булып йәшәнек, тип әйтәсәк. Бындай спектаклдә бөгөнгө көндә сәхнәләштереү ауыр һәм яуаплы. Уның башҡорт халҡына һуңғы хаты ла төрлөсә ҡабул ителәсәк, тип уйлайым.

**Сара БУРАНБАЕВА:** Үҙенең ҡайһы шәхесен герой итергә белмәгән халыҡтар бар. Ә беҙҙең Зәки Вәлиди кеүек донъя кимәлендәге тарихи шәхесебеҙ була тороп, уны һанға һуҡмау ҙур ахмаҡлыҡ булыр ине. Зәки Вәлиди образының беҙҙең төп театр сәхнәһендә һынландырылыуы, минең ҡарашҡа, ҙур батырлыҡтыр. Залда ултырғанда ла, сәхнә артында торғанда ла шәхесебеҙҙең аяныслы тормошонан күҙгә йәштәр килеп тығыла. Беҙ һәммәбеҙ ҙә был спектаклдә ҡатнаша алыуыбыҙға ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Миненсә, сәхнәгә сыҡҡан һәр артист күңелендә Зәки Вәлиди рухын йәшәтә. Ошо рәүешле беҙ тарихи шәхесебеҙҙе күңелдәребеҙҙә булһа ла тыуған еренә яңынан ҡайтара алырбыҙ, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Зәки Вәлиди шәхесенә ҡарата төрлө уйҙырмалар таратылыуы уның тураһындағы пьесаны сәхнәгә сығарыу өсөн сәйәси яҡтан еңел дә булмағандыр. Ни тиһәң дә, бөгөн уға төрлө сәбәптәр менән гәйеп тағыусылар ҙа юҡ түгел. Унан һуң, Зәки Вәлиди шәхесе бик ҡатмарлы образ булараҡ, сәхнәлә күп эҙләнеүҙәр, өйрәнеүҙәр талап итә. Халыҡ үҙенең бөйөк улын танырға, уның үҙ иле өсөн түккән көсөн дөрөҫ баһаларға, ысын тарихты белергә тейеш. Был әҫәрҙе яҙған автор ҙа, уның өҫтөндә эшләгән режиссер ҙа, һәм уның образын һынландырған ижадсылар ҙа ошоно маҡсат итеп ҡуйған.**

Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА яҙып алды.



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БОЛОТ БЕРЕКҺӘ,

## күк күкрәр...

Донъяла яҡшы кешеләр етешмәй икән, уларҙы күбәйтеү сараһын күрергә кәрәк.

**(Берес Скиннер).**

Күп кешеләр яҙмышы менән килешер ине лә, ләкин яҙмыштың да тауыш биреү хоҡуғы бар бит.

**(Станислав Лец).**

Йәшәү - ул өҙләкһеҙ камиллашыу. Камилмын, тип иҫәпләү - үҙеңде үлтереүгә тиң.

**(Христиан Геббель).**

Ирҙәр - шул уҡ балалар, тик буйға ғына оҙонораҡтар.

**(Джонн Драйден).**

Икенсе бер кешегә ярҙам ҡулы һуҙғанда, кеше Хоҙайға ла ҡағыла.

**(Уолт Уитмен).**

Изге булыу өсөн фәрештә булыу мотлаҡ түгел.

**(Альберт Швейцер).**

Кешеләр тарих хаталарында өйрәнмәй - был тарихтың иң төп һабағы.

**(Олдос Хаксли).**

Болот берекһә - күк күкрәр, халыҡ берекһә - ер тетрәр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ғүмере буйы бәхетле йәшәгән бер суфый була. Уның һағышлы, моңһоу сағын бер кемдең дә күргәне булмай, ул һәр ваҡыт көләп, йылмайып йәшәй. Инде ул ҡартайған, үлергә ваҡыты еткән. Шул саҡ шәкерттәренең береһе: "Беҙ һеҙгә һоҡланабыҙ. Һеҙ нисек бер ваҡытта ла күңелһеҙләнмәй йәшәй алаһығыҙ? Быға нисек өлгәшәһегеҙ?" - тип һораған.**

**Суфый уға шулай тип яуап биргән: "Уның сере ябай ғына. Ун ете йәшем тулғанда, мин бәхетһеҙлектең ни икәнен татығайным инде. Остазыма етмеш йәш ине һәм ул миңә былай тине: "Ҡасандыр мин дә әлеге һинең кеүек ҡайғылы инем. Ләкин шул саҡ бер уй мейемдә телеп үтте: был бит ни бары мин үҙем һайлаған халәт!"**

**Шунан бирле һәр бер иртә, уянғас, күҙҙәремде асырҙан алда үҙ-үҙемә һорау бирәм: "Мин нимә теләйем? Ғазапланыумы? Хозурлыҡмы? Бөгөн ҡайһыһын һайлайым? Ахыр сиктә, гел шулай тура килә: мин хозурлыҡты һайлайым!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 1153